*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,*
*филология фәндәре докторы*

# АТАЙСАЛ ХӘТЕРЕ

## 1. Ауыл-ара йыйындар

1915 йылда “Вестник Оренбургского учебного округа” тигән баҫмала Б.Зорин тигән автор “Башҡорт байрамы — йыйын” исемле мәҡәлә баҫтыра. Ул шулай башланып китә: “Йыйын — башҡорттарҙың йәйге байрамы. Ғәҙәттә ураҡҡа төшөрҙән алда үткәрелә торған был байрамдың башы бик боронғо замандарға барып тоташа. Ул ваҡытта башҡорттар мәжүси булған”. Шулай тиһә лә, “ғәҙәттә” тигәненә асыҡлыҡ индерергә теләгәндәй, артабан автор, бындай байрамдар “15 майҙан 10—15 июлгәсә һуҙыла”, тип өҫтәп ҡуйған (Башҡорт халыҡ ижады. I том. Йола фольклоры. Өфө, 1995. 207-се бит).

Зориндың ошо һүҙҙәре Әхмәтзәки Вәлидиҙең “Хәтирәләр”енән (Өфө, 1996) ике мәғлүмәтте хәтерләргә мәжбүр итә. Бактиһәң, беҙ башҡорт менән татарҙың уртаҡ миҙгел байрамы тип белгән һабантуй XX быуат баштарында “апрелдең беренсе яртыһында” “татар ауылдарында” ғына “сиратлап ойошторолған, йәғни, бөгөн — был ауылда, иртәгә — күрше ауылда, өсөнсө көн — уның күршеһендә”. Иғтибар итегеҙ, бер ҙә генә һабантуйҙы, хәҙергенән айырмалы рәүештә, сәсеү бөткәс түгел, ә киреһенсә, сәсеүгә төшкәнгә тиклем үткәргәндәр. Сөнки сәсеү бөтөүе түгел, ә сәсеүгә төшөү үҙе бер миҙгел байрамы иҫәпләнгән. Һәм ул, йола талап иткәнсә, бары үҙенә генә хас ритуалдар менән оҙатылған. Уның үҙ ырымдары булған.

Татарҙарҙан айырмалы рәүештә, һәр хәлдә, Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, башҡорттар иһә (хатта Көҙән ауылы халҡы кеүек, бер ауылда йәшәһәләр ҙә) йыйын ҡорған. Уны май аҙаҡтарында, йәғни яҙлауҙан йәйләүгә күскән дәүерҙә үткәрер булғандар. Әхмәтзәки Вәлидиҙең “Хәтирәләр”ендә был хаҡта һүҙмә-һүҙ шулай тиелә: *”Апрелдең беренсе яртыһында татар ауылдарында* сиратлап ойошторолған ***һабан туйына***, *май аҙаҡтарында башҡорт ауылдарына* ***йыйын байрамдарына*** һыбай барып, ҡай саҡ аттарыбыҙ менән бәйгелә ярышып, ҙурҙарҙың көрәшен ҡарап, бәләкәйҙәрҙең көрәшендә үҙем дә ҡатнашып ҡайта торғайным” (37-се бит).

Зориндың әйткәне бушҡа ғына Әхмәтзәки Вәлиди яҙғанды хәтергә төшөрмәгән икән. Ул да башҡорт уҡымышлыһы һүҙ алып барған йыйындарҙы күҙ уңында тотҡанға оҡшай. Ундай байрамдарҙа, Вәлиди

телгә алған ат сабыш бәйгеһе менән билһынаштан тыш, был автор тирә-йүндән халыҡтың бик күп йыйылыуы, йәштәрҙең, ҡурай, думбыра, ҡумыҙ, скрипкаға ҡушылып, ярыша-ярыша бейешеүе, һыр бирмәҫкә тырышып, шул күңел асыу сараларында ҡарттарҙың да улар менән бер тиң ҡатнашыуы хаҡында әйткән.

Зорин башҡорт йыйындарының тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булыуын да, шуға күрә уға халыҡтың ныҡ әһәмиәт биреүен дә билдәләгән. Уның әйтеүенсә, йыйындарҙы күмәк ауыл бер булып үткәрер булған. Йыйын йыйыуға башҡорттарҙың ифрат ныҡ әһәмиәт биреүҙәренә һоҡланып, ул шулай тигән: "Йыйын — башҡорттарҙың иң яратҡан байрамы. Ул хатта йот йылы ла үткәрелә... Бер аҙнанан йыйын тигәндә, ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей — бөтәһе лә тырышып-тырышып, булған ғына йорт йыһазын, кейем-һалымын, ҡашығаяғын таҙарта: йыуырлығын йыуа, йышырлығын йыша, мөрйәләрен ағарта. Кем дә кем мөрйәһен ағартмай, байрам көндө шул кешенең үҙенә йә йортона төртөп күрһәтеп: "Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ: әһәкәй, мөрйәһен дә ағартмаған бит әлүк!" — тип, күмәкләшеп көләләләр" (Күрһәтелгән том).

Әле телгә алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Зорин да, Вәлиди ҙә бары ***ауыл-ара*** нәүбәтләшеп үткәрелеүсән ***йыйындар, йәғни яҙғы-йәйге миҙгел байрамы*** хаҡында һүҙ алып барған.

## 2. Ырыу-ара йыйындар

Йыйындарҙың шундайҙары ла булған: улары ***ырыу-ара*** ойошторолоп, ҡайҙа үткәрелһә, шул урындың исеме менән аталған. Зәйнулла йыйыны, Аҡтүбә йыйыны, Ишембай йыйыны, Һәүнәк йыйыны, Бәйембәт йыйыны кеүектәре ана шундайҙар рәтенә инә. Һәүнәк йыйыны, мәҫәлән, Көньяҡ Уралдағы күркәм Һәүнәк ташында үткәрелер булған. Уны, нигеҙҙә, шул тирәлә йәшәгән Тамъян, Түңгәүер, Бөрйән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуҙары бергәләп ойошторған. Уларҙың башлыҡтары, моғайын да, бүтән ырыуҙарҙан да ҡунаҡтар, йолабыҙ ҡушҡанса, шул ҡунаҡтар ҡашына, йәғни ҡунаҡ күрһәтмәгә, йәнә ҡунаҡ саҡырғандыр.

Шуныһы ла мәғлүм: "Бейеш батырҙың айыу булып бейегәне" тигән риүәйәттә әйтелеүенсә, Һәүнәк йыйыны тирә-яҡ ауылдарҙан, алыҫ ерҙе яҡын итеп, йәйләүгә халыҡ күсенеп килеп, ул-был итеп урынлашыу менән үткәрелер булған. Тик шуныһы: йәйләргә Урал һыртына (Әбйәлил, Бөрйән, Баймаҡ яҡтары Көньяҡ Уралдың бер һыртын — Ҡырҡты, икенсеһен — Ирәндек, өсөнсөһөн бына шулай Урал тип айырым атап йөрөтә), мал-тыуар әйҙәп, күсенеп килгәнде көтөп кенә торғандай, айыу яфа һала башлай. Мал-тыуарҙы төнөн килеп тә һуға, шул этлеген ҡылырға көндөҙ ҙә ҡурҡып тормай. Шуға ла, йәйләүгә килеү менән, ҡыйыу һунарсылар, урмандарҙы, үҙән, әрәмәләрҙе ҡыҙырып, айыу ауларға тотонған.

Бер йылды айыу аулауҙа Бейеш батыр ҙа ҡатнаша. Бер үҙе, уҡһаҙаҡһыҙ-ниһеҙ, бары бысаҡ менән генә бер нисә айыуҙың башына еткән был батыр.

Һунар тамамланыуға Һәүнәк ташында йыйын ҡоролған. Шунда Бейеш батыр толоптай (йәғни бөтөн килеш) һыҙырып алынған айыу тиреһен кейеп, айыу булып бейегән, ти.

Тарихи Башҡортостан ерендә Туйтүбә, Мәсем ташы, Әңгәмә тауы, Туйбағы, Хөкөм тауы, Көнгәк тигән урындар бар. Ҡайһы береһенең аталыштарынан уҡ аңлашылыуынса, улар ҙа йыйын урыны булған.

Ырыу-ара йыйындар, ил-йорт өсөн хәл иткес мөһим ваҡиғалар йә бүтән мөһим мәсьәләләр тыуһа, шунда үткәрелгән (тимәк, улар миҙгел байрамдары тип кенә ҡаралмаған). Оло йыйын йыйып, мәсьәләне уртаға һалып тикшереп, ырыуҙар берлеге (союзы) тотош халыҡ мәнфәғәтенә ҡағылышлы ҡарарҙар ҡабул ҡылған. 1552 йылда Ҡазанды яулап алып, ханлыҡ яҡлы халыҡ яуының ҡаршылығын еңгәндән һуң, үҙ дәүләтенә ҡушылырға саҡырып, Иван IV башҡорттарға өндәмә артынан өндәмә ебәрергә тотона. Шуларҙы таратып йөрөүсе илселәр менән һөйләшеп, батшаның өндәмәләрендә иҫәпкә алынмаған, телгә алынып та, аңлашылып бөтмәгән мәсьәләләрҙе һорашып, уларға асыҡлыҡ индергәс, йыйындар йыйғандар. Шунда Аҡ бей батша саҡырыуына ыңғай яуап биреү хаҡында ҡабул ителгән ҡарарҙар ана шундайҙарҙан булған. Нигеҙенә “Бабсаҡ менән Күсәк” эпосының сюжеты һалынған Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә хәбәр ителеүенсә, “тарих туғыз йөз алтмыш бердә Бабсак уғли Күсәк үч илеүдан үч олуғ [ил] ағаларун алуб, йәғни Бикбау һәм Мәшәүле Ҡараҡужаҡ һәм Шәғали Шаҡман, үч кенәзләрни алуб. Бер ничә юлдашлари илә варуб, Аҡ бибадшаға баш салдылар һәм ярлукашлар (жалованные грамоты. — ***Ә.С.***) алдилар, атлас карамзин тунлар киделәр. “Йөз иүли (ил булған. — **Ә.С.**) халкымыз”, диб, Казанга бадшаға мәғлүм улдилар, бусуб (ҡасып. — **Ә.С.**) киткән нуғай халҡиның ерларун алдилар” (Башҡорт шәжәрәләре. Өфө, 1960. 111-се бит). Был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк менән фантазия бер эретмәлә әйтелгән. Уға тиклем Бөрйән бейе Ҡараҡөләмбәттең Ҡыпсаҡ бейе Бабсаҡты үлтереүе, шул арҡала Бабсаҡ улы Күсәктән үҙ үлемен табыуы хаҡында бәйән итеп, ошо хәлдәрҙең “бәйғәмбәремез Мөхәммәд мостафа салаллаһытәғәйләйһи вәссәләмнең һижрәтендан ете йөз йылдан суң” “Сыңғыҙ хан заманында” булыуын әйткәндән һуң, Бабсаҡ улы Күсәкте батшаға тәбиғ ҡылырға барыусыларға башлыҡ итеп күрһәтеү — хронологияны бутау, әлбиттә. Шуны иҫәпкә алған кеүек, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян ырыуҙарының уртаҡ шәжәрәһенең ике вариантында ла “килмакләрени үзи дә тәләб ҡылған (йәғни башғорттарҙан илселәр килеүен үҙе үк һораған, талап иткән. — ***Ә.С.***)” Иван батшаға дүрт ырыуҙың яҡшы кешеләренән “1-че.., Үсәргән руғындан — Бикбау кенәз, 2-че, Бөрйән руғындан — Иске би кенәз, 3-че — Ҡыпчаҡ руғындан Мәшәүәли Ҡараҡужаҡ кенәз, 4-че Тамъяндан — Шағали Шаҡман кенәз” барыуы хаҡында әйтелә. Ә инде Бөрйән ырыуының үҙ шәжәрәһендә ошоға өҫтәп Илсекәй бейҙе атағандан һуң, уның, икенсе төрлө әйткәндә, “йәғни Буранҡол би кенәз” икәненә асыҡлыҡ та индерелә (Башҡорт шәжәрәләре. 71-се, 121-се биттәр).

Юрматы шәжәрәһенән мәғлүм булыуынса, был ырыу иһә, батша менән осрашып һөйләшеү өсөн, Ҡазанға ырыу башлығы Тәтегәс бей етәкселегендә үҙаллы делегация ебәрә. Был аңлашыла ла. Ни өсөн тигәндә, ул саҡта был ҡәүем, 1920 йылда ТАССР төҙөлгәндә шул республика биләмәһендә ҡалдырылған Зәй, Шишмә һыуҙарын һыулап,

башҡа башҡорт ырыуҙарына (мәҫәлән, әле телгә алынған дүртәүгә) ҡарағанда, Ҡазанға байтаҡҡа яҡынараҡ йәшәгән.

Борон шундай тәртип, шундай йола булған: илселәр ил бурысын үтәп ҡайтҡас, ырыуы йә ырыуҙар береге алдында иҫәп-хисап биргән. Юрматы ырыуының бай тарихын мауыҡтырғыс хикәйәт кимәлендә тасуирлаған шәжәрәлә, батша менән осрашып, унан "рәхим идуб мырзалык чине" алган Тәтегәс бей, үҙ иленә ҡайтҡас, йыйын йыйып, хәҙергесә әйткәндә, "командировкаһы" ваҡытында ниҙәр эшләгән, шул хаҡта бәйнә-бәйнә "отчет" бирә. Бына шунан бер өҙөк: *"Ак би бадшаһға бардук. Баш салдук. Ҡол булдук. Мән Тәтәгәчкә бадишаһ, рәхим идеб, мырзалык чине бирде. Азнайға старосталык бирде вә һәм бадишаһдин бочкан (касып киткән. — **Ә.С.**) нуғайларның жирләрүн үтенеб алдык. Йөз сусар [тиресен] ясак [итеб] түләмәк булдык. Имде сез дә кәбул кыләмусыз," диб сорадым. Һәммәсе шул [йыйындағы] хәлайыклар: "Яхшы, барчаларымыз жанделдан (ысын күңелдән. — **Ә.С.**) ыразый (риза. — **Ә.С.**) булдык," диделәр"* (Башҡорт шәжәрәләре. 29-сы бит).

Шәжәрәлә махсус әйтелмәһә лә, аңлашылалыр ки, Бикбау кенәз дә, Иҫке бей ҙә, Мәшәүәли Ҡараҡужаҡ кенәз дә, Шәғәле Шаҡман кенәз дә үҙ ырыуҙары алдында ла, ырыуҙар береге алдында ла иҫәп-хисап биргән. Хәйер, уларҙың батшаға мәғлүм булыуҙары, уның тарафынан яҡшы ҡабул ителеүҙәре, унан тарханлыҡ дәрәжәләре, "үҙҙәренә наград итеб, грамота илан ерларен вә суларын үлчатеб вирелмакинә илтимас илә ғәриза" ҡылыуҙары, ҡайһы ерҙәре ҡайҙа тиклем булыуы (йәғни башҡорттоң традицион аҫабалыҡ хоҡуғын өр-яңынан раҫлатып "жалованная грамота" алыуҙары) хаҡында шәжәрәлә ентекле әйтелеүе лә шул ил ағаларының, үҙ замандаштарына ғына түгел, килер быуындарға ла төбәлгән "яҙма отчеты" кеүек ҡабул ителә.

Әлбиттә, бей йә тархан, йә кенәз тип аталһалар ҙа, илсе булып, үҙ белдектәре менән Иҫке бей ҙә, Тәтегәс тә, башҡаһы ла, батша ҡайҙа — мин шунда, тип сығып китмәгән. Тотош ырыу, ырыуҙар союзы, халыҡ яҙмышы менән бәйле, дәүләт әһәмиәтендәге яуаплы вәкәләтлекте (полномочиены) уларға йыйын биргән. Бикбау кенәз, Иҫке бей, Мәшәүәли Ҡараҡужаҡ кенәз, Шәғәле Шаҡман Ете ырыу береге тарафынан алған илсе булыу хоҡуғын.

Ни өсөн ете ырыуҙан ете бей бармаған һуң? Күрәһең, ул саҡта ла кворум принцибы буйынса эш иткәндәр. Етәү исеменән шул дүртәүгә батшаға "мәғлүм улыу" хоҡуғы бирелгән.

Мәсем тауында йәшәгән солтанаты "талай (байтаҡ) хандан артыҡ булған" Мәсем хан да, иленә ниндәйҙер йыртҡыс януар яфа һала башлағас, үҙенең ҡулы аҫтында ун ике бей булһа ла, уларҙың бөтәһен дә аяҡҡа баҫтырып тормай. Хан хат яҙған:

"Батырҙарым, килегеҙ,
Туҡтамаҫтан, атҡа менеп, елегеҙ.
Сыраҡтарым (күҙ нурҙарым. — ***Ә.С.***), килегеҙ —
Һеҙҙән ярҙам булмағанда,
Бөтөнләй харап илебеҙ," —

тип, хат ебәреп, бары дүрт ырыуҙың башлыҡтарын йыйыу менән генә сикләнә.

Ана шунан Түңгәүерҙән — ғәйәт мыҡты бәһлеүән Тимерҡотлоно, Тамъян ырыуынан — Тамъян батырҙы, Ҡыпсаҡтан — "фил мөсәлле, арыҫлан йөрәк" Бабсаҡты, Бөрйән ырыуынан Ҡараҡөләмбәт батырҙы алдыра ла, шулары менән генә кәңәшмә, үҙенә күрә кесе йыйын үткәрә.

Күрәһең, йыйындың кимәле хәл итәһе бурыс менән дә билдәләнер булған. Әгәр Мәсем хан ун ике бейен дә саҡырһа, теге яуыз йыртҡысҡа ауға сыҡҡанда улар бер-береһенә ҡамасау ғына тыуҙырыр ине. Бында тағы шуны ла иҫтә тотоу кәрәк. Беренсенән, фольклорҙа бей, тип әйтелә икән — батыр, батыр, тиелә икән, ырыу күҙаллана, йәки киреһенсә. "Бабсаҡ менән Күсәк" эпосында ла дүрт ырыуҙың дүрт батыры хаҡында һүҙ бара. Әммә һәр батыр ҙа — бей. Уларҙың һәр береһе үҙ ырыуын кәүҙәләндерә.

Бынан тыш, батыр йә бей, тип әйтелеү уның артынан эйәргән нөгәрҙәрен дә үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, Мәсем хан Түңгәүер ырыуынан, исемләп тороп, Тимерҡотлоно саҡыра. Ә ул юлдаш итеп "таңдап-таңдап (һайлап-һайлап. — ***Ә.С.***) йөҙ һикһән балуан алған". Түңгәүер иһә "йөҙ илле үнгәр (нөгәр. — ***Ә.С.***) батыр йыйып алған".

Икенсенән, аңлашылалыр ки, әгәр ун ике бей ҙә үҙҙәре менән шулай ярҙамсы батырҙарын алып килһә, күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын: ни донъяға һыйып йөрөрҙәр ине икән. Ә былай дүрт батырҙы дүрт тарафҡа тоҫҡап ебәрҙең ҡуйҙың һәм вәссәләм. Нөгәрҙәрен эйәртәләрме, юҡмы — уныһы батырҙарҙың үҙ ихтыярында.

Тимәк, Мәсем хан кесе йыйын йыйып дөрөҫ эшләгән. Бында уның хәрби тактиканы яҡшы белеүе лә асыҡлана. Ә һунар итеү, ауға сығыу — яуға барыу менән бер: икеһендә лә разведка, аңдыу, көтмәгәндә һөжүм итеү, ҡамау, эҙәрләү кеүек алымдар ҡулланыла, икеһенә лә ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек кәрәк, икеһендә лә йә ҡалаһың, йә үләһең.

Ырыу-ара йәки ырыуҙар союзы үткәргән Оло йыйындарҙа ла һәр төрлө күңел асыу саралары ойошторолор булған. Шунан һуң ырыуҙарҙың абруйлы кешеләре (бейҙәре, тархандары, аҡһаҡалдары, батырҙары) илкөн яҙмышына бәйле ижтимағи һәм сәйәси әһәмиәтле мәсьәләләрҙе тикшереп, ырыуҙар союзына ингән бөтә кешеләр тарафынан да үтәлеүе фарыз ҡарарҙар ҡабул итер булған. Әле телгә алынған эпоста әйтелеүенсә, беҙгә таныш дүрт батыры йыйылып бөткәс:

Шәһәрҙә Мәсем хан туй ҡыла, ти,
Батырҙарға бик өлкән һый ҡыла, ти;
Бер аҙ уйнап-көлөп алғандан һуң,
Шул ваҡыт Мәсем хан бер уй уйлай, ти.

Шул ваҡыт саҡыра, ти, батырҙарын,
Тектереп алтын-көмөш сатырҙарын;
Шунан хан һүҙ һөйләргә керешә, ти:
"Тыңлағыҙ, ҡолаҡ һалып, яҡындарым!
...Батырҙарым, минең яҡҡа ҡараң, — тине,
Минең хөрмәтемә яраң, — тине,
Һеҙҙәргә минең бер ҙур йомошом бар,
Яр (юлдаш. — ***Ә.С.***) булһын һәр ҡайһыңа Аллаң", —
тине...

Артабан уларҙың алдында торған бурысты аңлата. Ә бурыс, хәс тә “Бейеш батырҙың айыу булып бейегәне” тигән риүәйәттәге кеүек, бөтә урман, үҙән, әрәмәне ҡыҙырып, теге яуыҙды табып, атып алыуҙы аңлаткан. Шул риүәйәт кимәленән ҡарағанда, Мәсем хан да йәйләүгә сыҡкас күргәндер яфаны теге йырткыстан. Һәр хәлдә, шуныһы раҫ: тәүтормош заманындағы кеүек, һөрләгөшөп бергә йөрөмәгән сүрәттә лә, бер юлы күмәкләп сыҡкан һунар уңышлы тамамлана. Йыртҡысты үҙе үлтереүе хаҡында Мәсем ханға Бабсаҡ бей үҙе килеп әйтә. Шатлығының сиге булмаған хан нимә эшләй? Бына нимә эшләй ул:

Быны ишетеп, Мәсем хан торҙо инде,
Түңәрәккә муйынын борҙо инде;
Майҙан төҙөп, халыҡ йыйып, ат саптырып,
Төрлө ҡыҙыҡ тамаша ҡылды инде.

Икенсе төрлө әйткәндә, коллектив һунарҙың уңышлы тамамланыу уңайы менән Мәсем хан йәйләүендә йыйын үткәрелә.

### 3. Ете ырыу береге

Этнографтарыбыҙ әйтеүенсә, тарихи Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә көн иткән Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, Ҡара-Ҡыпсаҡ һәм Түңгәүер тигән ете ырыу бер союз хасил иткән. Дәүләтселек башланғысына эйә булған был берекмә тарихи сығанаҡтарҙа “Ете ырыу союзы” тип телгә алына. Ә халыҡ уны “Ете ырыу башҡорто” тип кенә йөрөткән. Тарихи Башҡортостандың да, уның да көньяҡ сиген Илектән алып Арал диңгеҙенәсә, артабан Каспий яғына тартылған сиктәрен һаҡлау иң элек ошо союз иңенә төшкән. Башҡортостан ҡушылғандан һуң федератив нигеҙле Рәсәй тип атала башлаған, уғаса Мәскәү кенәзлеге кимәлендә генә булған өр-яңы оло дәүләттең Тубылдан Каспийғаса һуҙылған сиген һаҡлау бурысы ла башта нигеҙҙә ошо ырыуҙар береге елкәһенә төшә.

Башҡорттоң ырыуҙары бик күп, мәҫәлән, 1730 йылғы иҫәп буйынса улар алтмышлап булыуға ҡарамаҫтан, “Ете ырыу” тигән һүҙ йыш ҡына “башҡорт” тигән этнонимдың (йәғни ҡәүем атамаһының) синонимы рәүешендә лә ҡулланылған.

Мәғлүм булыуынса, быйыл беҙ *башкорттар тарафынан “Ак бей батша” йә “Бөйөк кенәз” тип нарыкланған Иван IV сакырыуы буйынса* (шәжәрәләрҙә шулай тиелә) *тарихи Башкортостандың Рус дәүләтенә инеүенә 450 йыл тулыуын* тантаналы рәүештә билдәләргә йыйынабыҙ. Тарихтың үтә лә ҡатмарлы дәүерендә дәүләтсә фекерләүсән бейҙәребеҙ етәкселегендә башҡорт халҡы берҙән-бер дөрөҫ һәм яҙмыштың үҙен хәл итмәле шул тарихи аҙымынан һуңмы, нисектер, “Ете ырыу берекмәһе” тигәндә Ҡатай ырыуы менән Юрматы ырыуын да күҙ уңында тота башлағандар булһа кәрәк.

Бығаса әйтелгәнсә, борон юрматылар тәүҙә хәҙер инде Татарстан биләмәһендә тороп ҡалған Зәй һәм Шишмә буйҙарын төйәк иткән. Унан Оло Иҙел (Волга) аръяғында йәшәй биреп, кире элекке төйәктәренә ҡайта. Тарихсыбыҙ Салауат Таймасов Мәскәү архивтарында соҡоноп яңыраҡ

табып алған сығанаҡтарҙан мәғлүм булыуынса, “нуғайҙарҙың башлығы Исмаил (үҙебеҙсә әйткәндә, Исмәғил. — ***Ә.С.***) мырҙа... башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуында үҙенә күрә бер роль уйнаған” (Салауат Таймасов. Асыштар алда әле // Башҡортостан. 2006. 29 август). Юрматы ырыуы шәжәрәһендә әйтелеүенсә иһә, берҙән, көн һыуығынан, икенсенән, рустарҙың яҡынлашып килеүенән ҡурҡып, нуғайҙар Кубань-Кавказ яғына китә. Юрматы шәжәрәһендә аныҡ итеп был хаҡта бына ни тип яҙылған: *”Борынгы аталарымыз Ҡубандан килеб ирди, жир-сыу диб. Салкын сыу истаб (теләп. — **Ә.С.**) килгәнләр. Әмма кыш сывығы көн эсселегендән яман имеш. Әмма сыуык тәжрибәчинаһ караганда, төн ягындан урыс килгәне [яманырак]. Бу ерлардә урыс күб булгай (булыр. — **Ә.С.**).”* (Башҡорт шәжәрәләре. 28—29-сы биттәр).

Әлбиттә, IV—VI быуаттарҙа һундар ҡыҫымы аҫтында хасил булған “Халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе” йоғонтоһонда Уралдан Дунай буйына киткән венгрҙарға һанһыҙ башҡорт эйәргәне кеүек, мадъяр ҡанлыларҙың да байтағы бында тороп ҡалып, аҙаҡ башҡортҡа әүерелгән. (Белергә ине: әлеге көндә нуғайҙар төйәк иткән Ставрополь, Дағстан яҡтарында Юрматы, йә башҡорттоң бүтән ырыуҙарының этнонимын йөрөткән беҙҙәге ара, аймаҡтар һымаҡ вағыраҡ этник төркөмдәр йә шул этнонимдар ер-һыу атамаһы булып китеүенә миҫалдар осрамай микән? Беҙҙә Нуғай араһы, Нағайбәк тигән ҡәүемдәр, Нуғай юлы һәм Нуғай, Үрге Нуғай, Һаҡмар Нуғайы, Яңы Нуғай тигән ауылдар бар бит, шулар һымаҡ, тимәксемен). Шуның кеүек, нуғайҙарҙың да башҡорт ерендә тороп ҡалғандары әҙ булмаған, башҡорттоң да күптәре көньяҡҡа юл алған һәм ахырҙа нуғайлашҡан. Юрматы ырыуы шәжәрәһенән беҙгә шул мәғлүм: был ҡәүемдең башлығы Сәсле Дәрүиштең улы булмаған. Ул үҙенең берҙәнбер ҡыҙын нуғай егетенә бирә. Шунан тыуған Бурнаҡ бей башҡорттар менән ҡала, уның нәҫеле аҙаҡ иштәк, йәғни башҡорт булып китә. Уның ҡустыһы Йәдкәр бей иһә үҙ халҡынан айырылмауҙы хәйерле тип белгән һәм, нуғай күскененән ҡалмай, Кубань, Тын (Дон), Кавказ тарафтарына юл ала.

Иван IV (әйткәндәй, бер-ике миҫалды иҫәпкә алмағанда, башҡорттар егерме ике йәшлек кенә был батша йәнәптәренә тағылған “Грозный” йә “Яуыз” тигән ҡушаматты ҡулланмаған, киреһенсә, уны йә Бөйөк кенәз, йә Аҡ бей батша, йә Иван Васильевич тип олоҡлаған. Сөнки унан яуызлыҡ күрмәгән. Был хаҡта артабан һүҙ булыр) саҡырыуы буйынса, илсе булып Юрматынан барған Тәтегәс бей, Аҙнай баба, Илсекәй Тимер, Ҡармыш баба, уға тәбиғ ҡылып, унан “өч йөз өйлө кешемез бар, диеб”, “бособ киткән (ҡасҡан, йәшенгән. — ***Ә.С.***) нуғайдан ҡалған жирне үтенүб сораб” алалар (Башҡорт шәжәрәләре. 289-сы бит). Бына шулай юрматылар Ҡатай, Меңле, Табын, Бөрйән, Ҡыпсаҡ ырыуҙары менән сиктәш булып, хәҙерге Мәләүез, Ишембай райондары һәм ҡалалары биләгән ерҙәргә килеп ултыралар. Күрәһең, уларҙы ут күршеләре булған ҡатайҙар менән бергә тап шул замандарҙа Ете ырыу союзына алғандарҙыр. Борон халҡы күп һәм көслө ырыуҙарға көсһөҙөрәктәре үҙҙәре үк һырынып, аҙаҡ бер ырыу йә ҡәбилә хасил итеүе ҡәҙимге хәл иҫәпләнгән (ҡуш этнонимлы ырыуҙарҙың күптәре

ошо юлды үткән). Шуға күрә ырыуҙар берегенә бүтән ырыу йә ҡәбиләнең һырныуына аптырайһы түгел.

"Ете" тигән изге (мифик) һанды һаҡлап ҡалыу ниәтенән, шул һыналған союзға ингән өс Ҡыпсаҡ ырыуын дөйөмләштереп, Ҡыпсаҡ тип бер һүҙ менән генә йөрөтә башлағандарҙыр. Шәжәрәнән килтерелгән өҙөктә лә илсе итеп Аҡ бей батшаға Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ингән бөтә башҡорт ырыуҙарынан да түгел (ә улар һигеҙ: Бошман-Һыуын-Ҡыпсаҡ, Сәнкем-Ҡыпсаҡ, Гәрәй-Ҡыпсаҡ, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ (мин үҙем шунанмын), Ҡара-Ҡыпсаҡ, Һарыш-Ҡыпсаҡ, Аҡ-Ҡыпсаҡ (йәки Төрөкмән-Ҡыпсаҡ, Нуғай-Ҡыпсаҡ), Һары-Ҡыпсаҡ, Ете ырыу Ҡыпсағы), ә тотош ҡәбилә исеменән бер генә кеше, Мәшәүәли Ҡараҡужаҡ кенәз генә, ебәрелә. "Тарғын менән Ҡужаҡ" эпосын хәтерләһәгеҙ, Аҡса хандың ҡыҙы Аҡйондоҙҙо (эпостың варианты буйынса, Аҡюнысты) нуғай батыры Тарғын ҡулынан тап ошо батыр һалдырып алыуы ихтимал. Был хаҡта ошо юлдарҙың авторына мәрхүм Мөхәррәм Ҡужаҡов, йәғни шул Ҡараҡужаҡтың бер вариҫы, әйтә биреп ҡуйғайны ла, үкенескә ҡаршы, тулыһынса яҙып алырға насип булманы, ул баҡый донъяға күсте.

Бөтә башҡорт ҡыпсаҡтары өсөн дә уртаҡ символдарҙы хәтерҙә тотоу өсөн, заманында йыр ҙа сығарғандар. Әлшәй батыр йәшәгән Меңле ырыуы иләндә өҙөлөп тороп ҡалған ҡыпсаҡтар, уны үҙ төйәктәренә яраҡлаштырып, ошолай тип йырлар булған:

Ынйы, мәрйен кеүек, теҙелеп киткән
Ҡыпсаҡ-Асҡарҙарҙың урамы.
Ағастары — ҡарама, ҡошо — бөркөт,
"Туҡсаба"ҙыр уның ораны.

Ни өсөн йырҙа тамға ла әйтелмәгән, сөнки ҡәбиләнең ҡабырға (II), ҡапҡа (П), һәнәк (Y) кеүек төп тамғалары шул ҡәбиләгә ингән һәр ырыу, һәр ырыу составындағы һәр ара (тармыт, аймаҡ, түбә, нәҫел, йәүер, ос, кесе ырыу) тарафынан вариантлаштырыла.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтәйем. Һуңғы ваҡытта "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", шәжәрә байрамдары менән мауығабыҙ. Әммә йыш ҡына түшәмдән алынған оран, ағас, ҡош исемдәре, тамғалар күҙгә ташлана башланы. Хатта Бөрйәндәге Бабсаҡ бабабыҙҙың ҡәбере урынына ҡуйылған таштағы (уны ҡуйыусыларға рәхмәт, әлбиттә) яҙмаларҙа ла ошондай уҡ хаталар киткән. Ырыу атрибуттарын дөрөҫ билдәләү өсөн, С.И.Руденконың, Р.Ғ.Кузеевтың, Р.З.Янғужиндың китаптарына, "Сыңғыҙнамә"гә — күҙ, урындағы хәтерле ҡарттарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәңәш бирер инем. Бабаларыбыҙ йолаһын йола итәйек. Боҙмайыҡ уларҙың меңәр йыллыҡтарҙа һыналған һәм тәрәҡҡиләшеп фарыз үтәлмәле ҡанунға әүерелгән традицияларын, хөрмәт итәйек.

"Бабсаҡ менән Күсәк" эпосының ҡаһармандары аталы-уллы Бабсаҡ бей менән Күсәк бейҙең дә торған, йөрөгән ерҙәре нигеҙҙә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ иле рәүешендә күрһәтелһә лә, шул әҫәрҙә лә, шәжәрәлә лә улар Ҡарағай-Ҡыпсаҡ батыры тип түгел, тотош Ҡыпсаҡ иле батыры тип атала (әйтеп үтелеүенсә, хатта хронологик яҡтан хаталы мәғлүмәттә лә, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә Күсәк бей Иван дүртенсегә барыусы Ҡыпсаҡ ырыуының да, тотош делегацияның да етәксеһе сифатында телгә алына).

Мәсем хандан килепте бер хат Ҡыпсаҡҡа,
Ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡҡа;
Хан ярлығын ишеткән һуң, ултырһынмы?
Уйлаған бармаҡ булып Мәсем ханға.

Ҡыҫҡаһы, был миҫалдар барыһы ла Ете ырыу союзында бөтә Ҡыпсаҡ ырыуҙарының бер булып (ихтимал, Ете ырыу союзы эсендә үҙенә күрә автономияға эйә булған) бер берәмекте хасил итеүе хаҡындағы фекерҙе ҡеүәтләй.

## 4. Ете башҡорт ырыуының Атайсалда ла, Айҙаболанда ла йыйын йыйғанының сәбәптәре һәм аҫабалыҡ яҙмышы

Заманыбыҙҙың күренекле фольклорсыһы Мөхтәр Сәғитовтан ҡомартҡы булып ҡалған яҙмала (ҡарағыҙ: Башҡорт халыҡ ижады. I том: Йола фольклоры. Өфө, 1995. 207—209-сы биттәр) хәҙерге Бөрйән ырыуы биләмәһендәге Атайсал үҙәнендә яҙмышына "киләсәкһеҙ" тигән яманатлы мөһөр баҫылыуы һөҙөмтәһендә юҡҡа сыҡҡан тарихи Иҫке Тараүыл ауылы урынынан бик алыҫ түгел (ул яҡтан ҡарағанда, текә тау башындағы) аҡланда үҫеп ултырған йыуан имәнгә борон Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Юрматы, Тамъян, Ҡатай, Үҫәргән ырыуҙарының төп тамғалары ырып ҡалдырылыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Ошо факт, бер яҡтан, быға тиклем әйтелгәнсә, Ете ырыу союзының составы заманалар үтеү менән үҙгәреш кисереүенә өҫтәлмә дәлил булһа, икенсе яҡтан, борон тап ошо ерҙә ваҡыт-ваҡыт шул ете ырыуҙың йыйылышып йыйын үткәреү йолаһы күҙәтелеүенә иғтибар иттереүе менән әһәмиәтле.

Атайсалдағы тамғалы ағастан хәҙерге үлсәм күҙлегенән бик йыраҡта уҡ түгел, Түңгәүер ырыуының тарихи биләмәһендәге Айҙаболан аҡланында иһә заманында шул уҡ ете ырыуҙың төп тамғалары сабылған мөһабәт бағана торғаны мәғлүм. Күрәһең, Тамғалы ырыу ағасы менән шул Тамғалы ырыу бағанаһы янында Ете ырыу йыйыны, нәүбәтләпме, уңайына ҡарапмы, нисек булғанда ла үткәрелер булған. Бәлки, уларҙың береһе ете ырыу вәкилдәре йыйылыу өсөн, махсус рәүештә һаҡлыҡҡа билдәләнгәндер. Ни өсөн тигәндә, был варианттың да хаҡ булыу ихтималына тарихи нигеҙ бар. Бер риүәйәттән мәғлүм булыуынса, кенәз Александр Невский етәкселегендә рус яугирҙары менән бергә Чуд күленең боҙо өҫтөндә немец рыцарҙарын туҡмашып, татар-монгол яуына ҡаршы тороп, илен ҡурсаларға форсатын табып, Алтын Урҙа емереклектәрендә хасил булған ханлыҡтарға ла баш биреп бармай, яугирлығы менән шөһрәт ҡаҙанған башҡорттарҙы (моғайын да, тағы был ҡәүемдең татар-монгол, Алтын Урҙа хандары менән килешеү төҙөү тәжрибәләре булыуын да иҫәпкә алып), ҡан ҡойошһоҙ ғына үҙенең дәүләтенә индереү өсөн, Аҡ бей батша — Иван IV мул ғына ирек һәм хоҡуҡтар вәғәҙә итә. Шуны ул башҡорт бейҙәренә биргән "жалованная грамоталары" менән раҫлай. Хәҙерге тел менән әйткәндә, рус батшаһы, үҙе инициатива күрһәтеп, Башҡортостандың Рус дәүләтенә договор нигеҙендә инеүен тәьмин иткән. Шул документҡа ярашлы, бөгөнгө властар ишетергә лә теләмәгән, әммә татар-монгол хандары

ла иҫәпләшкән башҡорттарҙың ер биләүгә аҫабалыҡ хоҡуғы ла (ә Рәсәй тарихы башҡорттарҙан тыш ниндәйҙер башҡа халыҡтың бындай хоҡуҡҡа эйә булыуын белмәй), дингә хоҡуғы ла, традицион эске үҙидаралыҡ тәртиптәре лә, тимәк, йыйындарға йыйылып, уртаҡ мәсьәләләрҙе демократик юл менән тикшереп, бергәләшеп, кәңәш-төйөш итешеп, фекер төйнәшеү, бергә ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы хәл итеү мөмкинлеге лә һаҡланырға тейеш була. Әммә шул Иван Васильевич үҙе генә түгел, тотош Рюриковичтар династияһы ла тәхеттән китеп (ә башҡорттар Аҡ бей батша тип хөрмәт иткән Иван IV ошо династиянан була), шул йылы урынды 1613 йылда Романовтар династияһы эләктереүе була — батша үҙе үк инициатива күрһәтеп бейҙәребеҙгә үҙе тапшырған (бабайҙар әйтеүенсә, эт тиреһенә яҙылған) "жалованная грамоталар" менән нығытылған килешеү нормаларынан Рәсәй хакимдары ситләшкәндән-ситләшә башлай. Ғөмүмән, "жалованная грамоталар"ҙы инҡар итеүҙән башлап, "соглашение" йә "договор" тип аталған, шул иҫәптән, күҙ буяр өсөн, бер төн эсендә "ижад итела һалып" тағылған "ҡушымта"ға ымһындырып төҙөлгән һәм башҡа килешеүҙәрҙе һанламау, хатта ки уларҙы "клочок бумаги" тип мәсхәрәләү ғүмер баҡый Рәсәй өсөн үҙе үк норма булып килә. Хәйер, һәр миҙал да ике яҡлы була. Шуны раҫлап һәм:

Тарих — үткән-киткән түгел,
Тарих — һабаҡ дәресе.
Шул һабаҡты кем танымай,
Ул — маңҡор(о)т, дөрөҫө, —

тигәнде онотоп һәм Рәсәй хакимдарының татлы вә мул вәғәҙәләренә ымһынып, Башҡортостандың һемәйгәндән-һемәйеп ҡалыуы ла нормаға әүерелде. Ә бит, ҡартайһа ла, тарихтың хәтере дөрөҫ. Ана ул ни ти. Иван IV һәм тотош Рюриковичтар тәхеттә саҡта башҡорт менән властар һин дә мин һыйышып һәм һыйынышып, тыныс мөнәсәбәттә була. Сөнки Рус дәүләте менән төҙөлгән договор, "жалованная грамоталар"-ға теркәлгән килешеү еренә еткереп үтәлә: башҡорттоң үҙ еренә үҙе хужа икәнен раҫлаусы аҫабалығы ла, традицион эске идара тәртибе лә һаҡлана, уның динен ҡыҫыусы ла булмай. Романовтар династияһы 1613 йылда тәхеткә ултырып, шул хоҡуҡтарҙы сикләй, икенсе төрлө әйткәндә, Башҡорт иленең Рәсәй менән договорлы мөнәсәбәттәрен бер яҡлы боҙоп, хоҡуҡи баш-баштаҡлыҡ күрһәтә башлай. Башҡорт халҡының бихисап ихтилалдарына асылда шул сәбәпсе була ла инде.

Батша тәхетен дер һелкеткән шул ихтилалдарҙан властарҙың шөрләүе арҡаһында, исем өсөн генә һәм сикләнгән хәлдә булһа ла һаҡланып килгән аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы 1917 йылдың 29 октябрендә "Ер тураһында" тигән декретҡа һалған имзаһы менән Ленин бөтөнләй юҡҡа сығара. Революцияның шул уҡ юлбашсыһы шунан теүәл ун йыл элгәре генә "Аграрная программа социал-демократии в первой русской революции 1905—1907 годов" тигән хеҙмәтендә: "Депутат Хасанов от имени башкир (Уфимской губернии) напоминает об отобранном правительством двух миллионах десятин земель и требует их возвращения", — тип, уның талабын хуплаған була. Тимәк, был ҡыйыу депутаттың ер мәсьәләһендә әйткән башҡа һүҙҙәрен дә ҡеүәтләгән. Сығы-

шы Ленинда хуплау тапҡан Дәүләт думаһы депутаты Кәлимулла Хәсәнов Өфө губернаһы Бөрө өйәҙе Борай рус-башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы булған. Санкт-Петербургтағы Таврия һарайында (Таврический дворец) яһаған әлеге сығышында (эй, башҡортом, иҫеңдә тот!) ул шулай тип тә әйткән: “Әгәр беҙҙең хөкүмәт тарафынан тартып алынған ерҙәребеҙ кире ҡайтарылмаһа, беҙ (башҡорттар. — ***Ә.С.***) ул ерҙәрҙе кире тартып алыр өсөн бөтә сараларҙы ла ҡулланасаҡбыҙ. Ер мәсьәләһе, хөкүмәт ҡуйған ҡаршылыҡтарға ҡарамай, хәл ителәсәк”. Бөгөнгө вариҫтары васыят итеп ҡабул итмәле, байраҡ итеп күтәрмәле был һүҙҙәрен бары шул саҡтағы ауыл уҡытыусыһы кимәлендә генә мәғлүмәтле Кәлимулла Хәсәнов, беҙҙең аңға тарих дәреслектәре һеңдергәнсә, “халыҡтар төрмәһе”, “яуызлыҡ империяһы” тигән Рәсәй шарттарында, уның баш ҡалаһының үҙәгендә, Дәүләт думаһының бейек трибунаһынан әйтергә ҡыйыулығы еткән. Уға ҡарағанда белеме лә, сәйәси тәжрибәһе лә сағыштырғыһыҙ юғары, күптәре иң юғары ғилми дәрәжәле, хатта ки хакимиәттең дилбегәһен тотоу тәжрибәһе лә булған бөгөнгө Дәүләт думаһы депутаттары башҡорт ере хаҡында ошо кимәлдә һүҙ алып барырға йөрьәт итһендәр ине. Һис юғында, Дума трибунаһынан Кәлимулла Хәсәновтың һүҙҙәрен башҡа депутаттар һәм Рәсәй хөкүмәте иғтибарына уҡып ишеттерһендәр ине. Көнө-төнө Рәсәйҙең мәғлүмәт саралары беҙҙең илдең демократик ил, гражданлыҡ йәмғиәте булыуы хаҡында һөйләгән шарттарҙа ниңә быны эшләмәҫкә?! Коммунистар тарафынан совет осоронда ҡабул ителгән закондар һәм башҡа хоҡуҡи акттар ғәмәлдән сығарыла икән, ниңә “Ер тураһында” тигән декрет үҙ көсөндә ҡалырға тейеш? Тарихҡа Иван Грозный, Яуыз Иван тигән яман аты менән теркәлгән Иван IV, башҡортҡа изгелек итеп, “жалованная грамоталар” биреп тороп таныған һәм уның дәүләтенә ҡан ҡойошһоҙ ҡушылыуҙың тәүшартын һәм нигеҙен тәшкил иткән аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы инҡар итеү Рәсәйгә ирекле инеүебеҙҙе шик аҫтына алыуҙы аңлатмаймы? Аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы танымау әллә “бабаларығыҙ әл дә үҙ ихтыярҙары менән ҡушылып өлгөргән, юҡһа Башҡортостан барыбер яулап алыныр ине, ҡаршылыҡ күрһәтә ҡалһа, Ҡазан ханлығын буйһондорған тәжрибәнән сығып, унан былайыраҡ аяуһыҙлыҡ ҡылыныр ине” тигәнде, йә “ҡайҙа барыр инегеҙ һеҙ Рәсәйһеҙ, ҡушылыу түгел ҡушылыр инегеҙ; үҙ иркегеҙ менән килмәһәгеҙ, мәжбүр булыр инегеҙ, әммә бүтән шарттар менән” тигәнде аңлатамы? Был һәм уларға бәйле башҡа һорауҙар бөгөнгө Дәүләт думаһында ҡасандыр халыҡ ихтыярын үтәгән Кәлимулла Хәсәнов урынында ултырыусы иптәштәргә һәм “ҡулына закон менән ҡәләм” тотҡан башҡаларға ла адреслана. Ни өсөн тигәндә, тарихи Башҡортостан биләмәләренең Рус дәүләте составына инеүенең 450 йыллығы — башҡорт халҡының аҫабалыҡ хоҡуғының Рус дәүләте башлығы тарафынан юридик яҡтан раҫланыуының да 450 йыллығы ул. Шуға күрә лә юғарылағы һорауҙарға йәмәғәтселек ашығыс рәүештә һәм байрамдың бәҫен ебәрмәҫлек яуап алырға хаҡлы.

Ҡыҫҡаһы, бабаларыбыҙ, “олуғ шаһымыз император әғзәм сар Ибан Вачилич хәзрәтлары саҡырыуы буйынча”, уның дәүләтенә, Тәтегәс бей әйтмешләй, “башҡа һич тә уй уйларға сараһ булмағас”мы (Башҡорт шәжәрәләре. 29-сы, 121-се биттәр), нисек, үҙ теләктәре менән инеүенә

ярты быуат үтеүгә тыуа башлай ул һорауҙар башҡорт башында. Уларға башлап Романовтар сәбәпсе була.

”Сүп өҫтөнә — сүмәлә” тигән кеүек, 1798 йылдың 10 апрелендә батша Павел I башҡортҡа ҡарата геноцид сәйәсәтен законлаштырыусы указға имза ҡуя. Геноцид, тим. Сөнки ул документта, башҡорттар үрсемәһен өсөн, ҡатындары түлле саҡта, ирҙәрен айырып, егерме биш йылға линия (сик һаҡлау) хеҙмәтенә оҙатыу ҡарала. Сөнки тап шул указ буйынса Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы индерелә, башҡорттар хәрби сословиеға күсерелә. Икенсе яҡтан, хәрби тәртип үҙенекен итә. Әгәр һин башҡорт икәнһең, үҙең көн иткән урыныңдан бер аҙым да ситкә китә алмайһың. Икенсе берәй губернаға күсеп китеү хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.

Иң мөһимдәренең береһе шул — ырыуҙарҙың йыйындарын үткәреү ҡәтғи тыйыла. Сөнки ундай йыйындарҙа, именлек һәм башҡа донъяуи мәсьәләләрҙән тыш, Романовтар тыуҙырған яңы шарттарҙа ихтилалға күтәрелеүгә бәйле мәсьәләләр ҙә тикшерелер булған. «Кәңәшле эш тарҡалмаҫ» тигән кеүек, был иһә ихтилалдарҙың ойошҡан рәүештә башланыуын тәьмин иткән.

Ҡыҫҡалыҡ өсөн “Ете ырыу” тип атап йөрөтөлгән бер ырыуҙар союзының вәкилдәре йыйылыр урындың ике ерҙә Тамғалы ырыу ағасы һәм Тамғалы ырыу бағанаһы менән билдәләнеүенең бер (йәки берҙәнбер) сере, бәлки, шул указға бәйлелер ҙә әле. Әгәр, ысынлап та, шулай булған булһа (был мәсьәләне тарихсыларыбыҙ иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫ, моғайын), ул Тамғалы ағас йә Тамғалы бағананың береһе властарға, һис шикһеҙ, борондан уҡ мәғлүм булған. Ә йыйындар тыйыла, тыйылыу ғына түгел, эҙәрләнә башлағас, әлбиттә, традицияға тоғро ҡалыусан башҡорт йыйын йыйыу йолаһынан тиҙ генә арынмаған. Шул, әлбиттә, властарға мәғлүм булмаған икенсе урында йыйылыу ихтыяжын тыуҙырған. Тимәк, Ете ырыу береген хасил итеүселәрҙең ике урында йә үҫеп ултырған ағасҡа, йә бағанаға тамға һалыуы бик урынлы һәм бик яҡшы аңлашыла: уларҙың береһе властарҙан ҡасып, йәшерен (конспиратив) рәүештә йыйын үткәреүгә тәғәйенләнгән, тип раҫларға нигеҙ бар. Тик уларҙың ҡайһыныһы борон, ҡайһыныһы аҙаҡ билдәләнгән, хәҙер уны асыҡлау, бәлки, мөмкин дә түгелдер.

Ошо һүҙҙәрҙе уҡығас, кемдер, бәлки, эйе, уның хәҙер кәрәге лә шул саҡлы, хатта, бер тин, тип әйтер. Ә хәтер? Халҡыбыҙ шағиры Мостай Кәрим әйтмешләй, “хәтерҙе юғалтыу — хыялды юғалтыу менән бер ул”. Унан, бабалар йолаһын асылынаса белеү фарызлығы ни тиер бит әле! Миңә ҡалһа, шәхсән шулай уйлайым. Үҫеп ултырған ағасты тамғалау боронғораҡ булырға тейештер.

Сөнки үҫеү — йәшәү ул,
Йәшәү — сөнки үҫеү ул:
Үҫкән ағас йығылһа,
Йә төбөнән ҡырҡылһа,
Ҡыуғын үҫер ҡуйырып,
Сығып булмаҫлыҡ йырып.

“Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосының бер вариантында Тора хан менән әйтешкә ингән Иҙеүкәй ауыҙынан да ошоға оҡшаш, әммә

йәнәшәлек алымы ярҙамында фәлсәфәүи йөкмәткеле шундай һүҙҙәр әйттерелә (Башҡорт халыҡ ижады. V том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). Өфө, 2000. 53-сө бит):

Тамыры ҡалған урында
Сауыл үҫмәҫ тиһеңме?!
Ыласын үҫкән Уралда
Батыр үҫмәҫ тиһеңме?!

Тимәк, беренсенән, үҫеп ултырған бер ағас олонона, бер бағанаға күмәгеһе бер булып ете бейҙең үҙ ырыуының төп тамғаһын ырыуы уларҙың берҙәмлеген, үҙ-ара татыулығын, дуҫлығын символлаштырған; икенсе яҡтан, шул изге урын, шул Тамғалы ағас менән Тамғалы бағана бөтә донъяға мәғлүм "Донъя ағасы" ("Древо мира") хаҡындағы мифологик ҡараш башҡорттарға ла ят булмауына ла ишара яһай. Ә ул миф буйынса, шул мифик ағас күкте терәп тора була. Уның төбө, йәғни тамырҙары — аҫҡы донъяны, олоно — ер өҫтө донъяһын, осо (башы) өҫкөһөн кәүҙәләндерә, тип белгән боронғолар. Тимәк, Тамғалы ағас менән Тамғалы бағана донъя моделе хаҡында башҡорттарҙың да башҡа халыҡтарҙан кәм фекер йөрөтмәүен бәйән иткәндәй була. Шулай булмаһа, әҙ ине ти тау-ташлы Бөрйән менән Түңгәүер иләндә шыма таш. Сүкеп, ырып тороп шуға яҙҙың ҡуйҙың. Юҡ шул, күкте терәп торған, буйға буйсан, оҙон ғүмерле ағас кәрәк булған тамға ырырға.

Өсөнсөнән, миңә ҡалһа, тамғаларҙың үҫеп ултырған ағасҡа һуғылыуының үҙенә генә хас айырым мәғәнәһе лә булған: ул быуындарҙың, бер-береһенә ялғана-ялғана, алмашына килеүен дә, традицияларҙың күсәгилешлеген дә хәтергә төшөрөп, уларҙы дауам итергә саҡырып торорға тейеш булғандыр, моғайын. Нәҡ ошонда Иҙеүкәй батыр Тора ханға әйткән аҡыллы һүҙҙәр менән ауаздашлыҡты тойғандай булабыҙ ҙа инде.

Билдәле, ғүмер үтеү менән тамырһыҙ ағас, йәғни бағана ла, тамырлыһы ла серей. Әммә рәхмәтле һәм хәтерле һәр яңы быуын сереп ҡолаған бағана урынына яңыһын ултыртып, ҡартайыуҙан, ауған ағастың тамырынан үҫкән йә күршеһендә ултырған йәшерәк ағасҡа ете ырыу тамғаһын яңынан сабып торор булған.

Теге яман атлы указға имза һалған Павел I күптән ҡәбер эйәһе булһа ла, батшалар хөкөмө совет осоронда ғәмәлдән сығарылһа ла, һаман да батша хөкөмө буйынса йәшәгәндәй, ырыу йыйындары, шул иҫәптән Ете ырыу йыйындары ла үткәрелмәне. Бына шуға күрә лә һәм шуға ҡарамаҫтан, Ырыу бағанаһы менән Ырыу ағасын да, уларҙағы ырыу тамғаларын да яңырта тороу, беҙҙең заманда ла тарихи хәтере юйылмаған, изге бабаларыбыҙ рухын хөрмәт итеүҙән туҡтамаған игелекле кешеләребеҙ бар икән әле, тип шөкөр ҡылырға форсат бирә. Рәсми фарман көтмәҫтән, бары йөрәк ҡушыуы һәм хәтер, игелекле, изге күңелле һәм дәүләтсә фекерләүсән бабаларыбыҙ рухына хөрмәт тойғоһоноң әмере буйынса эш иткән шул кешеләребеҙ алдында, бүрек һалып, бил-баш эйге килә.

"Айҙаболандағы Ырыу бағанаһын Баймаҡтағы Ишбирҙе мәктәбе яңыртҡан," — тигәйне шул районда уңышлы эшләп килгән "Атайсал" йәмғиәте ағзалары. Ә инде Бөрйән районы Мәндәғол ауылы

механизаторы Илгизәр ағай Иманғолов әйтеүенсә, Атайсалдағы тамғалы имән (Мөхтәр ағай Сәғитов үҙенең яҙмаларында, моғайын, шуны телгә алғандыр) ныҡ ҡартайыуҙан ҡолағас, нисәнсе тапҡырҙыр инде ете ырыуҙың тамғаларын шул имәндең йәнәшәһендәге ағасҡа күсереп саба торған булғандар.

Үкенескә ҡаршы, теге мәлдә, мелиорация ла мелиорация, тип һөрән һалышып, тау-урманлы Бөрйәнде лә дала менән ярыштырмаҡ булып, һөрөнтө ерҙәрҙе киңәйтергә тотондолар. Шулай ағас төпләүгә дәррәү тотонған мәлдә ул тамғалы ҡайынды ла йолҡоп ырғытҡандар булып сыҡты.

## 5. Атайсалда кесе йыйын үткәне

Шуныһы һөйөндөрә, бәхеткә күрә, Башҡортостаныбыҙҙың бөгөнгө етәкселеге үткән дәүерҙәрҙә тарихи хәтер, тарихи ҡомартҡылар тәңгәлендә яһалған хаталар өҫтөндә әүҙем генә эшләй башланы. Тарихи хәтерҙе хөрмәт итеүселәр, шөкөр, бөгөн унда ла бар. Шәжәрә байрамдарын үткәреү хаҡында Хөкүмәтебеҙ сығарған мөһим ҡарар — шуның тос миҫалы ул. Ошо ҡарарҙы бойомға ашырыу сиктәрендә, ауылдарҙа “Шәжәрә байрамы”, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” байрамы үткәрелә. Бөрйән, Баймаҡ һәм Йылайыр райондары етәкселеге (хакимиәт башлыҡтары И.Ф.Зарипов, Р.Р.Сәйетов, Ю.С.Вәлиев), быларҙан тыш, әле һүҙ барған Ете ырыу союзының тарихи Тамғалы ағас стелаларҙы яңыртыу буйынса ғәмәли эш башланы. Бөрйән районынан “Таң” гәзите мөхәррире Юлай Манапов, шағирә Айһылыу Ғарифуллина, хакимиәт башлығы урынбаҫары Роза Ғүмәрова, мәҙәниәт бүлеге начальнигы Клара Ямғурсина, Башҡортостан рәссамдары берлеге рәйесе урынбаҫары Жәлил Сөләймәнов, Баймаҡ телевидениеһы операторы Хәйҙәр Көмөшбаев һәм башҡаларҙан торған бер төркөм энтузиастар хакимиәт башлығы Ирек Зарипов етәкселегендә ҡасандыр ете ырыуҙың тамғалы ағасы үҫеп ултырған Атайсал яланы (уны Тарауыл яланы тип тә йөрөтәләр) яғына үҙенсәлекле эҙләнеү экспедицияһы ойошторҙо. “Һәм башҡалар” рәтендә ошо юлдарҙың авторы ла бар ине.

Маршрутыбыҙ Иҫке Собханғол — Ағиҙел ҡасабаһы — Әтек ауылы — Тарауыл-Атайсал яланы — Иҫке Тарауыл ауылы урыны аша үтәсәк.

Бөрйәндең элекке юлдарының ғазап юлы икәнен хәтерләй-хәтерләй, Алдар тархан Иҫәнгилдиндың (Иҫәкәевтың) төп йорто иҫәпләнгән Әтеккә килеп тә еттек. Бында ошо батыр иҫтәлегенә һәйкәл асыу тантанаһында булынылғайны.

Әтектәр Алдар тарханды батыр тип кенә түгел, әүлиә тип тә белә. Уның йорт урынын әле лә изге урын тип иҫәпләйҙәр: ҡатындар бала тыуҙырғанда ауырлыҡ кисерһә, атҡа талаҡ тейһә, уларҙы уның нигеҙе урынына килтерәләр. Үткән быуатта яман янғын сығып, тотош ауыл янып бөттө инде, тигәндә, Алдар осо янмаған.

Әтектә беҙҙе урындағы мәктәптең директоры Нуретдин Әбүбәкеров, ауыл хакимиәте башлығы Фәйрүзә Ишбулатова менән “Атайсал” ҡоро активистары Әхиәр Исхаҡов, Рәшит Йәнбәков, Миҙхәт Байрамғолов, Хөрмәтулла хәҙрәт Буранбаев һәм “Һаҡмар” гәзитенең баш мөхәррире

Илһам Йәндәүләтовтарҙан торған Баймаҡ делегацияһы көтөп торған. Әгәр ҙә берәй юлдаш осратһа, әкиәт батыры: "Берәүҙән — икәү яҡшы", — тип уны әйҙүкләгән һымаҡ, уларҙы ла алып, туҡталып та тормаҫтан, юлыбыҙҙы дауам иттек.

Юл тигәнебеҙҙе иртәрәк маҡтап ташланылған икән. Хәйер, ул маҡтау уның йүнле өлөшө хаҡында ине шул. Әле иһә юл тиһәң хәтере ҡалыр! Ауылдан сығыу менән машинабыҙ, йөгөн теләр-теләмәҫ кенә һөйрәгән үгеҙ кеүек, баяғы юлдан, ерҙән күк нисек айырыла, айырмаһы шуға тиң булған юл шәрәмәтенән бата-сума ғына алға ҡыймылдай. Ауыр йөк машиналары, тракторҙар соҡоп бөткән, иҙелмәһе иҙелгән. Юл тип әйтерлеге лә ҡалмаған. Бары Ай рельефы менән кер таҡтаһын ғына хәтерләтә.

"Борон был урман юлы, моғайын, йәйҙәрен ваҡытлыса ғына файҙалана торған күс юлы ғына булғандыр ҙа, унан ағас аралатып ҡына, йә һөйрәтке һөйрәтеп кенә, йә һыбай ғына йөрөгәндәрҙер," — тип уйларға өлгөрмәнем, Ирек Фәсхетдин улы: "Ҡара һыйыр тауы", — тип ҡуйҙы минең уйҙарымды һиҙгән кеүек. Эйе, бынан һыбай үткәндәр... Шул үткәндәр араһынан берәү айырым-асыҡ ҡына күҙ алдына баҫҡандай булды кинәт. Ике ботона ике тирмән ташы тағылған... Үҙе атҡа түгел, ҡара һыйырға атланған. Дөрөҫөрәге, уны шулай атландырғандар. Атланыуы ла атланыу түгел: ҡара һыйырҙың ҡырлы һыртында үндекһеҙ-ниһеҙ, етмәһә, артына ҡарап ултыра... Үҙе туҡтауһыҙ ыңғыраша... Сарсаған. Кипкән ирендәре саҡ-саҡ ҡына ҡыймылдай ҙа, унан ара-тирә ишетелер-ишетелмәҫ кенә ялбарыулы өн сыға: "Былай яфалағансы, атай, сал да ҡуй мине!" Был ялбарыу ҡара һыйырҙы етәкләп алдан һыбай барған мыҡты кәүҙәле малайға йүнәлтелгән. Әммә ун өс-ун дүрте менән барған был үҫмер алтмышын үтеп, сәсе, һаҡал-мыйығы салланған ҡарттың, атай, тип, үҙенә өндәшеүенә ыжламай ҙа, иҫе лә китмәй...

Эйе, атаһын, ҡыпсаҡтарҙың бейе Бабсаҡты уңышлы һунары өсөн көнләшеүҙән тота килеп үлтергәне өсөн, варварлыҡтың ҡырағай ҡануны ҡушыуы буйынса, Ҡараҡөләмбәт өҫтөндә ҡон алыу йолаһын Күсәк бей хәҙер инде Ҡара һыйыр юлы тип йөрөтөлгән тап ошо юлда ана шулай атҡара башлай ҙа, ахырҙа хәҙерге Байназар ауылы янындағы тауға, Ҡыпсаҡ ырыуының изге тауына, мендереп, баҡыртып, баҡыр ҡаҙанда ҡура була (шунан алып ул тау Ҡурыуҙы тип аталып ғүмер кисерә). Был хаҡта эпос бына ни ти:

> Шунан Күсәк: "Эшем бөттө, китәм, — тине, —
> Атта елеп, Бабсаҡ иленә үтәм, — тине, —
> Тыныс булыр бынан ары Ҡыпсаҡ иле,
> Ҡарымтаға килә алмаҫ бүтән," — тине...
> Был хикәйәт тамам булды ошо урында,
> Даим (һәр саҡ. — ***Ә.С.***) ырыуҙар ҡырылышҡан
> бик борон да.
> Ниһайәт, Аҡ батшаға табиғ булғандан һуң,
> Баҫылыр булды ундай хәлдәр ил түрендә.

Бына шулай тамамлана мәшһүр "Күсәк бей" эпосының Сабирйән сәсән Мөхәмәтҡолов тарафынан шиғыр ҡалыбына һалынған Ҡыпсаҡ ырыуы версияһының бер варианты.

...Баймаҡтан килгән ҡунағыбыҙ Миҙхәт сәсән Байрамғолов ағай әйтмешләй, күрмәгәнде күрә-күрә (ә сәсән был һүҙҙәрен, миңә ҡалһа, үкенеү йә зарланыу рәүешендә түгел, шаяртыу, ысынлап та, ете ятып төшөнә бер кермәгән тәбиғәт хозурлығына һоҡланыу мәғәнәһендә лә әйтте, буғай. Сөнки форсаты сығыу менән, сырт-сырт иттереп, фотоаппаратын эшкә екте: пейзажсы рәссам булараҡ, материалға байыҡты ғына ағайыбыҙ) сәйәхәт ҡылыуыбыҙға, эпостың тап шул һуңғы юлдарында әйтелгәнсә, бабаларыбыҙҙың “Аҡ батшаға тәбиғ булғаны” туранан-тура сәбәпсе ине лә инде. Ни өсөн тигәндә, Юрматы ырыуы шәжәрәһендә әйтелгәнсә, “аҡ би бадишаһ... һәр тарафҡа хат-язулар илан илчеләр йөртөп.., һәр кем ирсә ҡачмасын вә һәр кем үз динендә торсон, үз ҡайғыдәсен (йолаһын, динен, традицион идара тәртибен. — ***Ә.С.***) тотсон, дип.., мәғлүм ҡылғандин соң” (Башҡорт шәжәрәләре. 29-сы бит), йәғни Аҡ бей бадишаһтың саҡырыуы буйынса, тарихи Башҡортостандың Рус дәүләте составына инеүенә 450 йыл тулыу уңайы менән Президентыбыҙ тарафынан 2006 йылдың “Төҙөкләндереү йылы” тип иғлан ителеүе хаҡындағы фарманы ҡуйған бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу йүнәлешендә мөһим бер сара юлға саҡырҙы беҙҙе. Беҙҙең бөгөнгө маҡсат Мөхтәр Сәғитов ҡалдырған яҙма буйынса һәм үҫеп ултырған Тамғалы ағасты күргән шаһит Илгизәр ағай Иманғолов ярҙамында Ете ырыу союзы йыйын үткәрә торған урынды асыҡлау һәм ҡасандыр шул ырыуҙарҙың бейҙәре тамға сапҡан ағастың урынын билдәләү ине.

...Юлыбыҙ аҙыраҡ йүнгә килгәндәй булды. Хәйер, инде юл тигән исемде йөрөткән батҡаҡлы йырҙанан ситкә сығып, сиҙәмдән барыу форсаты сыҡты. Бына ҡара урман артта ҡалды ла, тау-урманлы Бөрйәнебеҙ өсөн һирәк осрай торған, юҡ, берҙән-бер күренешкә тап булдыҡ: беҙҙең алдыбыҙҙа иңе иңгә, буйы буйға һыйғыһыҙ булып йәйрәп, Баймаҡ далаһын хәтерләтерҙәй киң ялан пәйҙә булды. Бер ситтәрәк элек бында ферма, иген келәте булғанын хәтерләтеп, хәҙер инде хужаһыҙ ҡалған иҫке ҡоролмалар етемһерәп ултыра. Ике-өс урында бесәнселәр күренә. Кемдәрелер бесән йыя, кемдәрелер кәбән ҡоя. Ялан ситендә туҡтап, тирә-йүнде байҡап алырға булдыҡ. Баймаҡтарҙың береһеме, кемдер:

— Бөрйәндә лә былдай ялан булыр икән, — тип ҡуйҙы, әллә һоҡланып, әллә күҙе күргәнгә үҙе ышанмай.

— Бына ошо була инде тарихи Атайсал-Тарауыл яланы. Майҙаны дүрт йөҙ гектар. Быныңише ялан Бөрйәндә бүтән юҡ, — тип аңлатма бирергә ашыҡты Илгизәр ағай.

Ошо Илгизәр Иманғолов етәкләгән мелиораторҙар төпләгән икән үткән быуаттың 70-се йылдарында был ялан ситендәге ағастарҙы. Ул беҙҙе аҫ яҡҡа урман ситенә алып китте. Бер ҡыуаҡлыҡ янына барып еткәс:

— Анауы өйкөм ҡарағайҙың бирьяғында ине мин күргән тамғалы ағас, — тип, беҙҙән ике йөҙ аҙым тирәһендә, бер ни тиклем Шишкиндың “Арыш” тигән картинаһындағы күренеште хәтерләтеп, ялан уртаһында ҡуйы үлән араһында ултырған ялбыр ҡарағайҙарға ымланы.

— Мөхтәр ағай мәрхүм телгә алған имәндең ҡалдыҡтары күренмәнеме? — тип һорай ҡуйҙым.

— Юҡ, бында ҡайындар ғына ине. Тамғалар шуларҙың берәүһендә ине, — тине Илгизәр ағай.

— Ызначит, имән ҡартайып ҡолағас, ул тамғаларҙы кемдер ҡайынға күсергән.

— Шулайтҡандыр... Уны күргәс, ят хәрефле яҙыу икән, тип уйланыҡ. Тәүҙә, был әллә берәйһенең ҡәбере булды микән, — тип ҡурҡып, уға теймәгәйнек. Аҙаҡ кемдер йолҡҡан булып сыҡты...

Шулай тине лә Илгизәр ағай, билбыуарҙан булып үҫкән үләнде йырып, әлеге ҡарағайҙар яғына атланы. Беҙ күмәкләшеп уға эйәрҙек. Бер аҙ бара биргәс, ул туҡтаны ла:

— Теге тамғалы ҡайын бына ошо тирәлә үҫеп ултыра ине, — тине. Беҙ тирә-яҡҡа күҙ һалдыҡ. Өс яҡтан — киң ялан, артта — урман.

— Ялан тултырып тирмә ҡорорға ла, ат сабыш, яу уйындары уйнарға ла йәтеш урын...

— Шишмәһе лә була торғайны...

— Улай-былай дошман яуы баҫырҙай булһа, бөтә нәмә ус төбөндәгеләй әллә ҡайҙан уҡ күренеп тормалы...

— Ҡапыл һөжүм итһәләр-фәлән йәшенергә, һаҡсылар ышыҡланып торор өсөн урманы ла йәнәш кенә...

— Бөтәһе лә хәрби тактика күҙлегенән уйланылған булған икән...

Илгизәр ағай Тамғалы ағас ултырған урынды, тоҫмал менәнерәк булһа ла, күрһәткәс, ир-ат халҡы бына шулай әрме хеҙмәтен үтәгән саҡта тактика, стратегия буйынса алған барлы-юҡлы мәғлүмәтен иҫкә төшөрөп, йыйын йыйылыр урындың һәр яҡтан да уңайлы һәм йәтеш булыуын раҫларға, ата-бабаларыбыҙҙың яугирлыҡ аҡылы менән эш итеүенә һоҡланыуын белдерергә ашыҡты. Ул арала Юлай Манапов йүгереп барып бесәнселәрҙән салғы алып килде, һәм Хөрмәтулла хәҙрәт, бисмиллаһын әйтеп, доға ҡылды ла йәшел сапанының салғыйҙарын ялпылдатып, ҡолас ташлап сабырға ла тотондо. Шул арала экспедициябыҙҙың етәксеһе ҡаҙыҡ киҫеп килтерергә өлгөрҙө. Киләсәктә ете ырыуҙың тамғалары сабылған бағана ҡалҡып сығасаҡ урынға, сабылған майҙандың ҡап уртаһына, йәшерәк ир-ат шул ҡаҙыҡты ҡағып та ҡуйҙы. Шул йоланы атҡарғанда, имза ҡуйыусылар араһында дүрт ырыу вәкиле барлығы мәғлүм булды.

— Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Тамъян!

— Кворум бар!

— Бик тә символик күренеш!

— Батшаға ла Ете ырыу береге исеменән дүрт ырыу вәкиле барған...

— Улай булғас, беҙҙең бөгөнгө йыйынды Ете ырыу берегенең кесе йыйыны тип атарға була бит, егеттәр...

— Ысынлап та.

Шулай тиештек.

— Яҡын арала бында ете тамғалы ҡарағас бағана торасаҡ. Эскиздары бар, — тине Ирек Зарипов һәм, — әйҙәгеҙ, Ете ырыуҙың тамғалы бағанаһы торасаҡ ергә ҡағылған ошо ҡаҙыҡҡа бөтәбеҙ ҙә ҡултамға һалайыҡ, — тип ҡуйҙы. Уның был тәкдимен барыбыҙ ҙа хуп күрҙек һәм Ете ырыуҙың дүртәүһенән вәкил ҡатнашып, үҙенә күрә кворум хасил итеүҙәре һөҙөмтәһендә, уйынлы-ысынлы кесе йыйын тип аталған

ҡорҙоң ҡарары тип ҡабул иттек. Шуны раҫлап, иҫтәлекле ҡаҙыҡҡа ҡултамғаларыбыҙҙы һалыуға, Хөрмәтулла хәҙрәт, ете ырыуыбыҙ бейҙәре рухына, илебеҙ именлегенә, ил баштарына, ырыуҙарыбыҙ һәм ырыуҙаштарыбыҙ һаулығына бағышлап, аят уҡып ебәрҙе.

Изге башланғысҡа изге китап һүҙе менән фатиха бирелде. Килер көндәрҙә бында башҡорт милләтенең дә, башҡорт дәүләтселегенең дә бер яралғыһы булған Ете ырыу союзының, тимәк, тотош халҡыбыҙҙың да ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген символлаштырыусы таяу булып мөһабәт Тамғалы бағана ҡалҡып сығыр, һәм нисә быуат шаулы йыйын күрмәй, ойоп ятҡан сал Атайсал, гректың, мысырҙың һәм бүтән ҡәүемдәр мифологияһындағы үлеп терелеүсе илаһтар һымаҡ, яңынан йәнләнеп, яңынан йәмләнер. Амин, шулай булһын!

## 6. Вәғәҙә үтәлде, өмөттәр аҡланды

Түҙемһеҙләнеп көткән ул көн тыуҙы. Бөрйәндән "Ете ырыу стела-бағанаһын асыу тантанаһы 5 октябрҙә була. Ғайса ағайҙы ла алып килһәгеҙ ине" тигән хәбәр алыу менән, академик Ғайса Хөсәйеновҡа шылтырата һалдым.

— Ғайса ағай, тағы ла Бөрйән саҡыра бит әле. Борон башҡорттоң Ете ырыу союзы йыйын үткәргән урында Тамғалы стела асыласаҡ, — тип, бәйнә-бәйнә аңлатыуҙы көтөп тормаҫтан, телефон сымының теге осонан ризалыҡ яуабы ишетелде. Әйтерһең, академиктың шунан башҡа мәшәкәте юҡ, Мостай ағай әйтмешләй:

Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона, —

тип, минең яҡтан изен генә көтөп ултырған:

— Барабыҙ. Ниңә бармай ти!

Артабан ҡасан, ҡайҙа, нисек осрашыу хаҡында килешергә генә ҡалды. 4 октябрь көнө юлға сығып та киттек. Юлдағылар, әйҙә, юлда булһындар, ә мин, Ғайса Батыргәрәй улына шылтыратҡанда ни өсөн "тағы ла Бөрйән саҡыра", тинем һуң әле, шуға аңлатма бирә торайым.

Былай булды. Академигыбыҙ күптәнән бирле Алдар батыр яҙмышы менән ҡыҙыҡһына. Уның хаҡында ҡисса ла яҙҙы. 2005 йылда шул батырҙың тыуған төйәге булған Әтек ауылында уға һәйкәл асырға булғас, шул тантанаға Бөрйән районы етәкселеге Ғайса Хөсәйеновты ла саҡырғайны. Тыумышынан уҡ республикабыҙҙа башҡорт телле берҙән-бер "Еңеү юлында" гәзитенең традицияһын яңы шарттарҙа яңыса дауам иттереүсе "Таң" гәзитен ойоштороған ваҡытта шунда эшләп Бөрйән шағиры булып танылған Хәсән Назаров менән мин фәҡирегеҙгә уны оҙатып йөрөү бәхете тейгәйне. "Тағы ла" тигәнемдең этнәкәһе бына шул инде.

Яҡшының ҡунағы — бер көндә, тиҙәр. Һынаған бар: яҡшының байрамы ла бер көндә булыусан. Алдар батыр һәйкәлен асыу тантанаһына килгәнебеҙҙә Бөрйән тигән данлы ырыу исемен ғорурлыҡ менән йөрөткән тыуған районымдың 75 йыллығын билдәләү байрамына юлыҡҡайныҡ. Был юлайы ла, рустар әйтмешләй, караптан балға эләктек: Иҫке Собханғолға килеп төшөүебеҙ булды — фольклор байрамына

юлыҡтыҡ. Егерме биш фольклор коллективы ул көндө ижади имтихан тотто. Кемдәр генә сығыш яһаманы унда — етмешен үткәндәр ҙә, ете йәштәгеһе лә. Бөтәһе лә һин дә мин сәхнә хужаһы итеп тотто үҙен ул көндө. Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул. Бында мин уларҙың һәр береһенә баһа бирергә йыйынмайым. Шуны ғына әйтәм: сығыштар тамамланыуға, сәғәткә күҙ һалһам, Хоҙайым, һиҙмәй ҙә ҡалынылған: һә, тигәнсе, өс сәғәт үткән дә киткән! Тимәк, мауығып ҡарарлыҡ, онтолоп тыңларлыҡ сығыштар күп булған. Иң мөһиме, был байрам бөрйәндәрҙең дә башҡаларҙан һис тә ҡалышмауын, йоҡомһорап ятмауын, тормош шулай ҙа тормош былай, тип зарланышмай, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған гүзәл традицияларыбыҙҙы ишәйтергә тырышыуҙарын, ижадҡа ынтылыуҙарын күрһәтте.

Фольклор байрамы байрам ғына булманы. Коллективтар өсөн ижади имтихан булыуы менән дә сикләнмәне. Ул һәр кемгә, һәр коллективҡа, үҙ сығыштарын башҡаларҙыҡы менән сағыштырып, бер-береһенән һабаҡ алырға мөмкинлек биргән асыҡ дәрес тә, ҡыҫҡа ваҡытлы һәм күргәҙмә курс та булды. Күптәр, моғайын, “Ах, бынауы Иҫке Собханғол мәҙәниәт йорто менән Мәһәҙи, Аҫҡар ауылдарының фольклор коллективтары һымаҡ сығыш яһарға өйрәнеп алғанда!” тип уйлап ҡуйғандарҙыр. Уйларлыҡтары бар ҙа шул — уларҙы әҙерләүгә профессионалдар ҡулы ҡағылғаны һиҙелеп тора ине.

Кемгә нисектер, миңә ҡалһа, ана шул фольклор байрамы, камертон кеүек, мине борон-борондан Фольклор иле тип танылған Бөрйәнем ерендә уҙасаҡ тәрән мәғәнәле тарихи вә мәҙәни сараға көн элгәре көйләгәндәй итте. Ысынлап та, 5 октябрь көндө инде һәр соҡоро, һәр һаҙматы таныш юлдан Атайсалға ҡарай юл алғанда, шуның тәьҫирендәлер, моғайын, “Юл аҙабы — гүр ғазабы” тигән мәҡәл иҫкә лә төшмәне.

Таныш юлдан, тиһәм дә, был юлайы осрашҡанда был танышыбыҙ — беҙҙе, беҙ уны танымағандай булдыҡ. Ни өсөн тигәндә, был арала көн дә һыҙырып яуған ямғыр үҙенекен иткән. Күренеп тора, тырышлығы һис кенә лә бушҡа китмәгән: үткәнендә тәгәрмәстәр яртыһынан ғына сумған соҡор-саҡырға ҡыры тиңе итеп һыу тултырған. Үткәнендә беҙ ултырған күмәк машина ҡалдырған эҙҙәрҙе тәрән-тәрән йырғанаҡтарға әүерелдергән. Теге саҡта еңел генә үткән урындарҙа ла машиналарыбыҙ, тишелгән танауына кейҙерелгән түңгәләккә тағылған дилбегәне ҡырын ятып тартыуға ла иҫе китмәгән ҡарышҡаҡ үгеҙҙәрҙе хәтерләтеп, ыҡҡа бармай ҡырталашты... Әммә берәү ҙә зарланманы, берәү ҙә юлдан кире боролманы. Нисек итһәк иттек, илле алла, ҡырҡ мулла менән тигән кеүек, имен-аман һәм теп-теүәл килеш Атайсал яланы ситенә килеп сыҡтыҡ. Был мәл, иманым камил, теге саҡтағыса, район хакимиәте башлығы Ирек Зарипов үҙе руль артына ултырған беҙҙең машинала килгән академик Ғайса Хөсәйенов, халыҡ йырсыһы һәм ҡурайсы Дәүләтбай Дуҫым Рәхмәтуллин, бар ғүмерен тыуған яғыбыҙҙы өйрәнеүгә бағышлаған атҡаҙанған уҡытыусы Марат Муллағолов һәм мин фәҡирегеҙ, тирә-яҡтан ябырылып бында килеүебеҙгә сәбәпсе булған Ете ырыу бағанаһын башҡаларҙан алда күрергә теләгәндәй, тәҙрәләргә текәлгәнбеҙ.

— Ана ултыра! Ана!

— Көн болотло булһа ла, ете суҡлы ҡурай тажы әллә ҡайҙан ялтлап күренеп тора!

Академик Ғайса Хөсәйенов фән донъяһында ла, халыҡ араһында ла ғүмеренең ғалимлыҡ дәүеренең күп өлөшөн халҡыбыҙ шағиры Мостай Кәрим ижадын өйрәнеүгә һәм уның нескәлектәрен әҙәбиәт һөйөүселәргә төшөндөрөүгә бағышлаған белгес булараҡ мәғлүм. Юл тигән оло дәрәжәгә дәғүә итһә лә, беҙҙең алда имтихан тота алмаған, киреһенсә, үҙе беҙҙе һынарға маташҡан ерҙән килә ятҡанда, һынамсыл ҡарашы менән һынап килә торғас, машинабыҙҙың руле ышаныслы ҡулдарҙа икәненә төшөнөп, тынысланғандай иткәс, академик ағайыбыҙ:

— Бер йылды, — тип һүҙ асты, — Мостай ағай менән Рауза еңгәй икәүләшеп Малҡар иленә халыҡ шағиры Ҡайсын Кулиевҡа ҡунаҡҡа барғандар. Руль артына ултырып, ҡот осормалы Кавказ юлдары буйлап, быларҙы хужа үҙе йөрөтә икән. Шунда Мостай ағай: “Водителебеҙ — халыҡ шағиры. Былай булғас, беҙ кем булып сығабыҙ инде?!” — тигән. Шуның кеүек килеп сыҡты бит әле был сәфәр. Бөрйәндең башлығы — үҙе беҙҙең водитель. Беҙ үҙебеҙ кем булып сығабыҙ инде былай булғас?!

Ир-аттың берҙәм көлөүенә салоныбыҙ бер нисә секундҡа зыңлап торҙо, хатта машинабыҙ сайҡалып-сайҡалып киткәндәй итте. Шунан һуң салонда тынлыҡ урынлашҡайны. Әйтерһең, һәр кем академиктың мәрәкәләп әйткәнен ысынға алып, үҙ алдына уйға батты. Әле бына иҫтәлекле бағана-стела күренеүе хаҡында ишетеү менән, ҡапыл уянып киткәндәй, Ғайса ағай биргән “дәрәжәләребеҙ”ҙе онотоп, бөтәбеҙ ҙә тәҙрәгә ҡапландыҡ.

Ете ырыу йыйыны үткәрелгән урында билге кеүек ярпайышып ултырған ике ҡарағайҙан алыҫ түгел, нәҡ теге мәлдә беҙ ултыртҡан бағана урынында (арлы-бирле юнғыслап ҡына ултыртылһа ла) ул ваҡытлы билгенең дәрәжәһе ҙур ине. Ул вәғәҙә символы булып торҙо бында. Сөнки теге мәлдә ағасын үҙе һайлап, үҙе киҫеп тороп, Ирек Зарипов урмандан уны үҙе алып килеп биргәйне. Ошо ғына ла уны вәғәҙә бағанаһы тип атарға ерлек бирә. Ул кесе йыйында ҡатнашыусылар уның был мәғәнәһен яҡшы аңланы. Шулай ҙа вәғәҙәне яҙыу, ҡултамға менән нығытыуҙы ла хуп күрҙе. Ошо урында Ете ырыу бағанаһы торасағын яҙып, бына ни өсөн теге саҡта кесе йыйынға йыйылыусылар ҡултамғаларын һалды уға. Шул рәүешле вәғәҙәле бағана үҙе үк юридик документ статусын алғандай булғайны.

Мин йәнәшәмдә генә ултырған “водителебеҙ”ҙең йөҙөнә күҙ һалам. Алыҫтан ҡарағанда берсә Санкт-Петербургтағы Александр бағанаһын, берсә ҡаҙап ҡуйылған ҡойроҡло яу уғын хәтерләтә биреп, алдыбыҙҙа һерәйеп ҡалҡып сыҡҡан һомғол бағана-стела өсөн ҡулайлы ҡарағас һайлай башлағандан алып, уны киҫеп ошо хәлгә еткереп, урынына килтереп ултыртҡанға тиклем әллә нисә тапҡыр күреүенә ҡарамаҫтан, алдындағы юлды иғтибарынан ысҡындырмай ғына, ул да беҙ ҡапланған яҡтан күҙен алмаҫҡа тырыша ине. Ә йөҙөн ҡәнәғәт йылмайыу нурландыра. Ҡәнәғәтләнергә лә, ауыҙ йырып йылмайырға ла бөгөн хаҡы бар уның. Илгизәр ағай телгә алған замандарҙа Бөрйән совхозының ветеринария буйынса табибы сифатында был яҡтарға ла

килеп сыҡҡылай ине бит. Тамғалы ағас хаҡында шул саҡтарҙа уҡ хәбәрҙар ине. Тик, башҡалар һымаҡ уҡ, ул да тамғаларҙың мәғәнәһен дә, әһәмиәтен дә аңламай ине. Яҡташы Мөхтәр Сәғитовтың яҙмаһын уҡығас ҡына, ырыу шәжәрәләре, урындағы риүәйәттәр, эпостар менән таныша килә генә аңланы ул эштең асылын. Ана шунда моронлағайны уның күңеле төбөндә, эх, шуны яңынан тергеҙгәндә, тигән хыял. Һуң булһа ла уң булһын тигән кеүек, ҡасандан бирле күңеле төбөндә йөрөткән хыялы бөгөн килеп, Республика көнө алдынан ғына, ғәмәлгә ашһын әле! Рәхмәт Баймаҡтағы коллегаһы Рөстәм Сәйетовҡа! Рәхмәт ошо стела мәсьәләһе буйынса тынғы бирмәгән “Атайсал” ҡорона! Һәм, әлбиттә, ошо эшкә иғтибар итеп, уның барышы менән ҡыҙыҡһынып торған Мортаза Ғөбәйҙулла улына рәхмәт! Ошолар хаҡында алдан уҡ үҙе һөйләгәнгәме, уның сыуаҡ көндәй яҡты йөҙөнән ана шуларҙы уҡығандай булдым.

Шул арала уға һорауҙар яуҙыра башланыҡ:

— Бейеклеге күпме инде уның?

— Башҡорттоң ете ырыуы берегә йыйылыр урын булғас, “7” һанына өҫтөнлөк бирергә тырыштыҡ: өҫкө өлөшө — ете метр, ер аҫтындағыһы — ике.

— Ниндәй ағас?

— Ҡарағас. Йылайыр урман хужалығына рәхмәт! Уны шуларҙан килтерҙек.

— Йәше билдәлеме икән?

— Егеттәр, 300 йылдан артығыраҡ йәшәгән ағас булып сыҡты...

— Дә-ә. Башҡорт башынан үткән бик күп тарихҡа шаһит булған икән. Теле булһа, әллә нимәләр бәйән иткән булыр ине...

— Быға тиклем һөйләмәгәнен хәҙер үҙенең барлығы, булмышы менән бәйән итеү бурысы ошо стеланың үҙенә төшәсәк.

— Эйе-е, күңеле һаҡ, зиһене камил булып, стеланың телен белеүселәргә, әлбиттә...

Шул ерҙә әңгәмәбеҙ өҙөлдө — машинабыҙ стеланың янына уҡ килеп еткәйне инде. Беҙ төшөргә ашыҡтыҡ. Төштөк тә, баштарыбыҙҙы саңҡайтышып, уратып йөрөп, уны ентекләп ҡарай башланыҡ. Йыуан ҡарағас һырлап, ырып эшләнгән башҡорт орнаменттары менән биҙәлгән. Барыһы ла уны әҙерләүселәрҙең был эшкә күңел биреп, зауыҡ менән тотоноуы хаҡында һөйләй. Күккә терәү булайым, тигәндәй һерәйеп торған был һомғол бағананың ослайып бөткән осо стилләштерелгән ете тармаҡлы ҡурай тажы менән тамамланыуы уны символик мәғәнәле итә, уға йәм биреп тора. Бағана олоно әйләнәһе, уратып сыҡҡансы, ырылған ырыу тамғалары менән биҙәлгән. Улар етәү. Бер ҡулса хасил иткәндәй, түңәрәк буйынса урынлаштырылыуы шул символик мәғәнәнең бер яғын — шул ете ырыуҙың бер ҡор тәшкил итеүен аңлата булыр. Ә инде бағана-стела тирәләй ултыртылған һәм һәр береһенә берәр тамға иретеп йәбештерелгән суйын бағаналар ете ырыуҙы, уларҙың бер-береһенә сынйыр менән тоташтырылыуы шул ырыуҙарҙың союзын, шул союздың ныҡлығын, бер-береһенә тағылышҡан сынйыр быуындары һымаҡ, береһе артынан икенсеһе, уныһы артынан өсөнсөһө һәм башҡаһы алмашҡа килә барған шул ҡәүемдәрҙең яңынан-яңы

быуындары ла шул берлек төшөнсәһен онотмаҫҡа тейеш икәнде символлаштыра.

— Стеланы кәртәләп торған сынйырлы суйын бағаналарҙы баймаҡтар ултыртты, — тип, үҙенең өҫтөнә тәүге гид вазифаһын алғандай, тарихи һәйкәлдең тарихына аңлатма бирә лә башланы Ирек Фәсхетдин улы. Үҙ сиратында хакимиәт башлығы урынбаҫары Роза Ғүмәрова иһә:

— Башҡорт ырыуҙарының тамғалары бер нисә вариантлы. Беҙ бында ырып ҡуйыр өсөн, “Сыңғыҙнамә”гә лә күҙ һалдыҡ, Рәил Кузеев күрһәткән төп тамғаларҙы ла иҫәпкә алдыҡ. Бағана-стела проектының авторы — республика күләмендә танылыу алған үҙебеҙҙең мәшһүр рәссамыбыҙ, сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы Рәмил Иманғолов, проектты ғәмәлгә ашырыусы — Мөхәррәм Вәхитов. Проекттың иң һуңғы вариантын әҙерләгәндә, Баймаҡта рәссам булараҡ та танылған Миҙхәт сәсән Байрамғоловтың эскиздары ла, башҡа тәҡдимдәр ҙә иҫәпкә алынды, — тине.

Ҡарағас бағана олонон уратып сыҡҡан ете ырыу тамғаһы баймаҡтар ултыртҡан суйын бағаналарҙа ла ҡабатлана. Күренеп тора, уларҙы Ете ырыу союзына бүләк итеүсе “Баймаҡ ҡойоу-механика заводы” асыҡ акционерҙар йәмғиәте оҫталары күңел биреп эшләгән.

Әҙерләнеше һәм урын-еренә ҡуйылышы менән үк был ҡарағас һәйкәл халҡыбыҙҙың “Ил төкөрһә, күл булыр”, “Күмәкләгән — яу ҡайтарған”, “Кәңәшле эш тарҡалмаҫ” тигән мәҡәлдәренең ни тиклем хаҡлы икәнен тағы бер төшөнөргә мәжбүр итте.

...Бына тантаналы минуттар етте. Иң элек һүҙҙе ошо һәйкәлде ҡуйыу идеяһы менән янып, башҡаларҙың да күңеленә ут һалған кеше, Бөрйән районы хакимиәте башлығы, башҡорттоң Тау Бөрйәне вәкиле Ирек Зарипов алды. Ул үҙенең сығышында Ете ырыу берегенең тамғалы ағасы урынында ете тамғалы стела асыу акцияһының Башҡортостан менән Рус дәүләтенең договор нигеҙендә федерацияға нигеҙ һалыуына 450 йыл тулыуын билдәләргә әҙерләнгән дәүерҙә, Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың 2006 йылды “Төҙөкләндереү йылы” тип иғлан иткән фарманын, Хөкүмәт Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтовтың шәжәрә байрамдары үткәреү хаҡындағы ҡарарын ғәмәлгә ашырыуға бер миҫал булыуын билдәләне. Шул яғы менән дә уның тәрән мәғәнәгә эйә икәненә иғтибар иттерҙе. Район хакимиәте башлығы хаҡлы. Йәшерен-батырыны юҡ, ҡайһы берәүҙәр Президент указын да, Премьер-министрҙың ҡарарын да бер яҡлы аңлай. Үҙҙәре шулай аңлап ҡалһа, тағы бер хәл, башҡаларға ла шулай аңлаталар, шунан сығып, ғәмәли эш ҡылалар. Дөрөҫ, “благоустройство” тигәндең тулы мәғәнәләге эквиваленты башҡорт телендә юҡ. Әммә икенсе системалағы бүтән телдең бер һүҙен мотлаҡ бер һүҙ менән тәржемә ҡылырға тимәгән бит. Һәр хәлдә, рустың (ә Президенттың был указының да төп нөсхәһе, ғәҙәттәгесә, ошо телдә яҙылған) “благоустройство” һүҙен аңлатмалы һүҙлектәр “оборудовать, сделать хорошим и удобным” тип төшөндөрөргә тырышһа ла, үҙебеҙсә әйткәндә, ул ҡыйышты төҙәйтеүҙе, ҡолағанды торғоҙоуҙы, йортто, ихатаны, урамдарҙы йыйыштырыуҙы, тәртипкә килтереүҙе генә аңлатмай. Ул шулай уҡ тыуыуына 175 йыллығы ҙур күтәренкелек менән билдәләнгән Мифтахетдин Аҡмулла әйткәнде лә үҙ эсенә ала булыр. Ә был мәғрифәтсе шағирыбыҙ шулай тигән:

Иң әүәл паклау кәрәк эстең керен,
Эстә тулып ятмаһын һаҫыҡ эрен.
Аһ дәриға! Эс таҙарһын, эс таҙарһын!

Ә тарихи хәтерҙе яңыртып, иҫтәлекле урындарға шул уҡ ерҙәге, ҡул аҫтындағы материалдарҙан, күп сығымдар талап итмәгән ошо Ете ырыу союзына бағышланған тамғалы бағана-стела кеүек һәйкәлдәр ҡуйып сығыу — "төҙөкләндереү" тигәнде тура мәғәнәһендә бойомға ашырыуҙы ла аңлата, Аҡмулла күҙ уңында тотҡан рухи төҙөкләндереүгә лә тура килә.

Шәжәрә байрамдарын да ҡайһы берәүҙәр ырыу һәм уны тәшкил итеүсе араларҙың (аймаҡтарҙың, тармыттарҙың, нәҫелдәрҙең һ.б.) генеалогик таблицаһын, йә булмаһа ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны хаҡындағы мәғлүмәткә генә ҡайтарып ҡалдырып, ҡалған яғын һабантуй схемаһы буйынса байрам итеү менән генә сикләнеүсән. Шик юҡ, былар ҙа мөһим, әлбиттә. Әммә, форсаты тейәме, юҡмы, шул уҡ аҡыл эйәһе Аҡмулланың:

Китапты, фәрештәне, бәйғәмбәрҙе
Ҡоро атын белеү менән ни файҙа бар? —

тигәнен иҫтән сығармау һәм уны шәжәрә байрамына яраҡлаштырып аңлау хәйерле.

Ана, зат-ырыу байрамын беренсе булып (1993 йылдың йәйендә), тимәк, әле өлгө алырлыҡ бер ниндәй ҙә тәжрибә юҡ саҡта, "Шәжәрә байрамы" тип үткәргән баймаҡтар (Ленин исемендәге колхозды тәшкил итеүсе Таулыҡай, Буранбай, Сыңғыҙ ауылдары) нимә эшләне. Иң элек улар был байрам өсөн бик тә уңайлы урын һайлағандар ине. Һыуы, һәр ауыл үҙ йәйләүен ҡорһон өсөн дә, аш-һыу әҙерләүгә лә ҡулай ҡатлы-ҡатлы әрәмәһе лә бар ине ул урындың. Был тирәләге халыҡ данлыҡлы Бөрйән ырыуының Дала Бөрйәненә инә. Нәҡ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев әйткәнсә, ырыуҙың тарихы, унан сыҡҡан күренекле шәхестәр, урындағы фольклор хаҡында мәғлүмәттәр яҙылған стендтар эленгәйне. Улар бөтәһе лә әллә ҡайҙан уҡ: "Беҙ — дала Бөрйәне!" тип торғандай ине.

Бынан тыш, һәр ара үҙенең йәйләүен ҡороп, уны этнографик ҡомартҡылар менән йыһазландырып, ошо кесе этник төркөмсәнең шәжәрәһен яҙып (ә ул тотош тарихты үҙ эсенә ала), эргәһенә генеалогик таблицалар элгәйне. Боронғо йола ҡануниәте талап иткәнсә, һәр башҡортҡа үҙ нәҫелен кәмендә ете быуынғаса белеү фарыз булһа, баймаҡтарҙа егерменән ашыуын белеүселәр бар икәне асыҡланды. Йә ағас, йә йомғаҡ, йә баҫҡыс рәүешендә генеалогик таблицаларҙа һуңғыраҡ быуындар фотопортреттар менән күрһәтелгән ине. Һорашып, мин шуны белдем. Был байрамға халыҡ бер йыл алдан әҙерләнеп, эште бүлешеп, эҙләнеү, тикшеренеү эштәре алып барған: кемдәрҙер баш ҡалҡытмай архивтарҙа ултырған, кемдәрҙер урындағы фольклорҙы йыйған, кемдәрҙер этнографик экспонаттарҙы ҡайғыртҡан, йырсылар йыр һайлаған, сәсәндәр тел ҡайраған.

Шәжәрә байрамы майҙанында һәр ауыл, ара йәйләүенең ҡапҡаһы төбөнә һөңгөлө бағауылдар баҫҡан ине. Был иһә, элекке йоланы иллюстрациялауҙан тыш, һәр төрлө реаль һаҡланыу сараһы ла ине.

Һәр ауылдың оҫтабикәләре ҡул эштәренә, аш-һыуға ни тиклем оҫта икәненә инандырмалы күргәҙмәләр ҙә ойошторолғайны. Әле лә хәтеремдә: шишмә аръяғына йәйләү ҡорған сыңғыҙҙарҙың өҫтәлендә һикһәнгә

яҡын милли аш төрө бар ине. Һәр ризыҡ төрө һалынған һауыт аҫтына уны әҙерләү юлдарын (технологияһын) өйрәткән аңлатмалар ҡыҫтырылған. Тикшереүсе комиссияны (ә мин фәҡирегеҙ шуның составында инем) аш-һыуҙың күп төрлө һәм тәмле булыуынан тыш, шул аңлатмаларҙың шиғыр рәүешендә яҙылыуы ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Өлгө өсөн шуларҙың иң ҡыҫҡаларынан бер миҫал:

Ҡаймаҡҡа ҡамыр баҫам,
Һеҙгә тағы сер асам:
Еләктән бешә йүрмә.
Урталары бөгөлгән,
Сит-ситтәре бөрөлгән,
Мейес эсенә теҙелгән,
Тәмле булып күренгән.

Бигерәк тәмле күренһә лә,
Һыуынһын ул саҡ ҡына.
Торармын да ваҡ ҡына,
Тәрилкәгә теҙермен,
Сәй эсеп кинәнермен.
Эсәрмен сәй һәүетемсә,
Үпкәләрем йөҙгәнсә...

*(Йүрмәле еләк бәлеше)*

Байрамда, уны колхоздың уңыштарын барлап, алдынғыларҙы бүләкләү тантанаһына әйләндермәй, ырыу тарихы, шәжәрә һәм уларҙы өйрәнеү һәм һаҡлауҙың маҡсаты, әһәмиәте, урындағы тарихты тыуҙырыусы күренекле шәхестәр хаҡында һүҙ барҙы. Һәр теманың да осо республика, милләт яҙмышы, суверенитет мәсьәләләренә килеп ялғана торҙо.

Программаға ярашлы, һәр йәйләү үҙенең йыһазландырылышы, һәр ара һөнәре, үҙ шәжәрәләрен белеү кимәле буйынса ярышты. Ғөмүмән, Таулыҡайҙар үҙ ауылын шәжәрә байрамын үткәреү буйынса методик үҙәк тип аталыуға дәғүә итмәле кимәлдә үткәрҙе ул байрамды. Әйткәндәй, "Шәжәрә музейы" тигән исемгә дәғүә итмәле шәжәрә бүлмәһе лә ошо ауылда. Ул мәҙәниәт йортонда урынлашҡан. Унда әлеге байрамды ойоштороған һәр ауылдағы араларҙың нәҫел-нәсәбенең тармаҡтарын күрһәткән стендтар эленгән, хатта боронғо ҡанбабаның портреты ла бар.

Донъя барында тыуым туҡтамай. Был — тәбиғи. Шәжәрәләр, тимәк, дауам итә. Таулыҡайҙар быныһын да иҫәпкә алған. Унда булырға тура килһә, иғтибар итегеҙ: әгәр ошондай стендтар коридорҙа ла торһа һәм башлана биреп ҡуйылһа, белегеҙ: бында түлле халыҡ йәшәй.

Йәшерен-батырыны юҡ, беҙҙә әле лә "һайт, тигәнгә — тайт" принцибы буйынса эш итеү ғәҙәте бар. Был осраҡта ла шулайыраҡ хәлдәр күҙәтелгеләй. Әһә, хөкүмәт ҡарар сығарған икән, уны үтәй һалырға кәрәк! Кәрәк, әлбиттә. Әммә нисек! Был осраҡта, руссалап әйткәндә, "лишь бы" тигән "ҡағиҙә" үҙенекен итә. Һәм китте бөттө — вәссәләм! Район күрһәтмә төшөрә, урында ашыҡ-бошоҡ, әлән-борхан итеп, әлеге "лишь бы" буйынса эш башлана... Һөҙөмтәлә, шәжәрә байрамы "генеалогик таблица плюс һабантуй (йә ҡәҙимге концерт) схемаһы" төҫөн ала ла инде.

Әлегесә, өҫтән төшкән план, күрһәтмәне “лишь бы” принцибы буйынса үтәргә күнегеү арҡаһында, хәҙер уны ҡыш та үткәрә башланылар. Эйе, шәжәрә байрамы — миҙгел (календарь) байрамы түгел. Шулай ҙа уны йөкмәткеле һәм маҡсатҡа ярашлы итеп үткәреү өсөн йәй ҡулайыраҡ. “Шәжәрә” һүҙенең мәғәнәһе лә шуны талап итә. Ә ул “ағас” тигәнде аңлата. Бағана ла — ағас. Утын да — ағас. Әммә “шәжәрә” тигәндә, ғөмүмән, ағас түгел, ә күп тармаҡлы, ботаҡ-сатаҡлы, япраҡлы, ҡыҫҡаһы, тере ағас күҙ уңында тотола. Шуға ла уға бағышланған байрамдың да тәбиғәт ҡуйынында үткәрелеүе тәбиғи ҙә, эффектлы ла, хәйерле лә була.

Бөгөнгө көндә, төрлө сәбәптәр арҡаһында, фамилиялары яңырыу һөҙөмтәһендә, яҡын ҡәрҙәштәрҙең никахҡа инеү хәлдәре осрай. Ә борон, бындай хәл булмаһын өсөн, ҡоҙа булышыусы яҡтар ете быуынға тиклем зат-зәүерен тикшерер булған. Бындай тикшеренеүҙәр һәр төрлө нәҫел ауырыуҙарынан һаҡланыу, характерҙарҙы асыҡлау сараһы хеҙмәтен дә үтәгән.

Төрлө сәбәптәр арҡаһында, икенсе милләт телендә теле асылыу арҡаһында, үҙен шул тел эйәһе булған халыҡ вәкиле тип белеүселәр ҙә бөгөн бихисап. Шәжәрә байрамдары ана шуларҙың да күҙен асыуға булышырға тейеш, тип беләм. Сөнки башҡорттар ил иткән төбәктә (тарихи Башҡортостан ерендә) милләтте хасил итеүсе ырыуҙар, уларҙың Сыңғыҙ хандан алған ағас, ҡош, тамға, оран кеүек айырыу билдәләре тик башҡорттарҙа ғына һаҡланған. Ошо биләмәлә тик башҡорттар һәм уларҙың ырыуҙары үҙҙәренең килеп сығышы, аталышы хаҡында легенда, риүәйәттәр белә (фәндә улар этногенетик һәм этнонимик легенда, риүәйәттәр тип атала).

Йәнә шул: ошо биләмәлә тик башҡорттоң ғына милли эпосы бар. Ул легендалар ҙа, ул риүәйәттәр ҙә, ул эпостар ҙа тик Урал, тик тарихи Башҡортостан ерҙәре менә бәйле, мәңгелеккә шунда ереккән. Улар барыһы ла башҡорттоң боронғолоғо, борон-борондан ошо ерҙең хужаһы, аҫаба булыуын дәлилләүсе документ әһәмиәтенә эйә. Шул әйтелгәндәр: ырыуҙар, уларҙың билдәләре, ырыуҙарҙың, халыҡтың килеп сығышы, аталышы хаҡында легенда-риүәйәте, милли эпосы булмаған халыҡ Америка халҡы кеүек йыйылма ҡәүемдән ғибәрәт. Хатта милли эпосы булыу-булмауына ҡарап, ундай халыҡтарҙың ҡасан ойошоуын да плюс-минус рәүешендә, һәр хәлдә, фәндә “эпик дәүер” тип аталған ваҡыт үлсәме ярҙамында яҡынса билдәләп була. Ана шуға ла, мәшһүр энциклопедик ғалимыбыҙ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев әйтеүенсә: “Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү фарыз: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды (шәжәрәңде. — ***Ә.С.***) белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү”. (Өләң тигәндә, ул хәҙер беҙ рус, Европа фәне йоғонтоһонда эпос тип йөрткән әҫәрҙәрҙе күҙ уңында тотҡан һәм: “Өләң, йәки башҡорт эпосы... Бөтә башҡорт батырҙары өләңдәрҙә йырлана”, — тигән (Өмөтбаев М. Йәдкәр // Баҫырға әҙерләүсеһе Ғиниәт Ҡунафин. Өфө, 1984. 190-сы, 192-се биттәр). Ә Меңле ырыуы шәжәрәһе, “Мөхәммәтсәлим хаҡлы. Ул әйткәндәрҙе белеү үҙеңдең милли сығышыңды асыҡлауға булыша. Әммә был мәғлүмәттең маҡсаты бының

менән генә сикләнмәй. Тағы ла мөһимерәк маҡсаты бар уның”, тигән кеүек, ошо әйтелгәндәргә өҫтәгәндәй итеп, былай ти: “Белеңезләр. Ғафил (ғәмһеҙ. — ***Ә.С.***) булмағызлар. Ғаҡыллы аңлар. Ғаҡылсызның бер ҡолағындин керүб, берсендин чығар. Имам Әғзам хәзрәтләре әйтмәдеме. Укүн, йәғни нәселдин белмәгән кеше бадишаһ алдында сүз сүзләргә (һөйләргә) ярамас. Ахырғудин хәбәр белмәгән хакимчелеккә ярамас, тиде” (Башҡорт шәжәрәләре. Өфө, 1960. 50—51-се биттәр). Был аҡыллы һүҙҙәрҙе шәжәрә өйрәнеүселәр һәм шәжәрә байрамдарын ойоштороусылар файҙалы кәңәш итеп ҡабул итһә ине лә, үҙҙәренең маҡсаттарына яраҡлаштырһа ине. Ул сағында зат-ырыу, нәҫел-нәсәп шәжәрәһе хаҡында һүҙ алып барыу менән генә сикләнмәҫ инек. Йәшәгән еребеҙҙә тыуған, таралған һәм һаҡланып ҡалған милли вә рухи ҡомартҡыларыбыҙ, эпостарыбыҙ, ҡобайырҙарыбыҙ, риүәйәт, легендаларыбыҙ, йырҙарыбыҙ, таҡмаҡтарыбыҙ, көләмәстәребеҙ, бәйеттәребеҙ һәм башҡа ҡомартҡыларыбыҙ ҙа, уларҙы ижад итеүсе, һаҡлаусы, башҡарыусылар ҙа, йәшәгән ауыл, район биләмәһендәге ер-һыу атамалары һәм уларҙың килеп сығышының тарихы ла урындағы ҡәүем шәжәрәһенең бер өлөшө икәненә төшөнөр инек. Ауылдағы аралар (тармыт, аймаҡ, кесе ырыу тигән эске этник төркөмсәләр) һәм уларҙың килеп сығышын бәйән иткән аңлатмалары хаҡында әйтеп тораһы ла түгел.

Ер-һыу, аралар килеп сығышының аңлатмалары үҙҙәре үк легенда йә риүәйәт хасил итә. Ә уларҙа урындағы тарих сағыла. Бына нимәһе менән ҡиммәт улар.

Әгәр ҙә ошо әйтелгәндәр генә лә иҫәпкә алынһа, Ете ырыу союзына бағышланған тамғалы бағана кеүек һәйкәлдәр асып, шуларҙа М.Өмөтбаев әйткән ырыуҙарға бәйле мәғлүмәттәр ҙә теркәлһә: Бабсаҡ бейгә, Алдар батырға, Хәйрулла сәсәнгә, Шүлгәнташҡа, Йылҡысыҡҡанкүлгә — бөрйәндәр, Сүрәш Мәргәнгә, Бабичтың “Башҡортостан” тигән ҡобайырына — баймаҡтар, Ҡаһым түрәгә — стәрлебаштар, йылайырҙар — ете ырыуға, юрматылар — үҙ ырыуҙары хөрмәтенә, балтастар — Салауат батырҙың һуңғы яуы урынына ҡуйған ябай һәйкәл, стелалар өлгөһөндә таҡтаташтар, стелалар ҡуйыуҙы — урындағы тарихты, шәжәрәне, фольклорҙы белеү, башҡарыу буйынса бәйгеләр үткәреүҙе программаларға, сценарийҙарға индерһәләр, шәжәрә байрамдары шоу (үҙебеҙсә шау-шоу) булыуҙан бигерәк, ысын мәғәнәһендә тәрбиә сараһы ла, ғилем сараһы ла булыр ине. Байрам штамп буйынса түгел, ижади яҡтан төрлөрәк итеп үткәрелер ине. Ирек Зарипов та үҙенең сығышында Ете ырыу береге йыйын үткәргән урында бағана-стела асыу ваҡиғаһының баһалап бөткөһөҙ тарихи әһәмиәткә эйә булыуына, урындағы тарихтың халҡыбыҙҙың данлы дөйөм тарихының ҡабатланмаҫ биттәрен тәшкил итеүенә баҫым яһағанда, был сараның шәжәрә байрамдары үткәреү хаҡында Хөкүмәтебеҙ иғлан иткән ҡарарҙы бойомға ашырыуҙың бер төрө булыуын, йәғни уның күп төрлө булырға тейеш икәнен күҙ уңында тотто.

— Тарихи ҡомартҡыларға бай булыуы менән беҙҙең район башҡа төбәктәрҙән нығ айырылып тора. Бының ҡәҙерен белеү фарыз. Сөнки үткәнде белмәй тороп, киләсәкте төҙөү мөмкин түгел. Үҙебеҙҙең тарихыбыҙға, рухи мәҙәниәтебеҙгә иғтибарлыраҡ булайыҡ. Беҙҙең бөрйәнебеҙҙе Шүлгәнташ мәмерйәһе, “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” кеүек мәшһүр

эпостарыбыҙ аша хәҙер бөтә донъя белә. Шул уҡ ваҡытта Бөрйән асылып бөтмәгән сер һандығы булып ҡала бирә әле. “Кәңәшле эш тарҡалмаҫ”, тигән боронғолар. Бөгөнгө ошо йыйыныбыҙҙың ата-бабаларыбыҙҙан мираҫҡа ҡалған изге урында үтеүе лә — кәңәшле эшебеҙҙең нәтижәһе ул. Киләсәктә лә үҙ-ара кәңәшләшеп, ошонда ваҡыт-ваҡыт йыйын үткәргән ата-бабаларыбыҙ шикелле, булған мәсьәләләрҙе уртаға һалып хәл итеүгә бөгөн атҡарған изге эшебеҙ бер этәргес көс булһын! — тип тамамланы ул һүҙен.

Дала бөрйәндәре исеменән Баймаҡ муниципаль ҡалаһы һәм район советы сәркәтибе Кирәймәргән Кәйекбирҙин үҙенең сығышында “элек-электән башҡорттоң төп ете ырыуының аҡһаҡалдары, ир-азаматы... килеп, кәңәш ҡорған, милләттең киләсәгенә бәйле оло мәсьәләләрҙе хәл иткән, яу ҡайтарыу, ҡайһы ырыуға ҡайҙа мал йөрөтөү кеүек донъяуи проблемаларҙы ла тикшергән, киләсәккә маҡсаттар билдәләгән.., күп кенә тарихи факттарға шаһит булған” Атайсалда осрашыуға ифрат шат булыуын белдереп, шулай тип тә әйткәйне:

— Бөгөнгө бәләкәй генә, әммә әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ ошо йыйындың изге Рамаҙан айы барған мәлдә, Башҡортостан Республикаһы көнө алдынан үтеүе лә тәрән символик мәғәнәгә эйә. Ун алты йыл инде Рәсәй Федерацияһы составында суверенлы республика булып йәшәгән Башҡортостаныбыҙ әлеге көндә аяғында ныҡлы баҫып тора, алдағы көндәргә ҙур ышаныс менән баға. Бойондороҡһоҙлоҡ яулауыбыҙ, үҙаллылыҡ алыуыбыҙ халҡыбыҙҙың тарихи асылына ҡайтыуына, тарихи хәҡиҡәттең тергеҙелеүенә булышлыҡ итеп кенә ҡалманы, башҡа халыҡтарҙың үҫешендә лә мөһим роль уйнаны... Дүрт ярым быуат самаһы элек беҙҙең ата-бабаларыбыҙ дәүләт кимәлендәге бик мөһим мәсьәләне — Рус дәүләте составына инеүҙе — тап ошондай Атайсал яланы ише йыйын урындарына йыйылышып бергәләп хәл иткән. Уларҙың сәйәси яҡтан тәрән белемле булыуҙарын күрһәткән был аҙымы башҡорттарҙы халыҡ булараҡ һаҡлап алып ҡалыуҙа баһалап бөткөһөҙ мөһим роль уйнаған. 450 йыл самаһы элек барған был ваҡиғаның Рәсәй федерализмына нигеҙ һалыныуға этәргес булғанына бөгөн бер ниндәй ҙә шик юҡ. Шунлыҡтан Башҡортостандың Рус дәүләте составына инеүенең 450 йыллығын тантаналы билдәләү тотош ил кимәлендә оло сараға әйләнергә тейеш тә инде. Бөгөнгө көндә данлы Бөрйән ырыуы ерендә ошо символик стеланы асыу — был байрамға беҙ индергән бәләкәй генә, әммә тәрән тәрбиәүи мәғәнәгә эйә булған тос өлөшөбөҙ ул. Был ваҡиға тағы шуныһы менән дә әһәмиәтле. Тарихты тергеҙеп, хәтерҙе яңырткан был сара — киләсәкте алдан күрә, тойомлай белгән аҡыллы ата-бабаларыбыҙ алдындағы изге бурысыбыҙҙы, уларҙың аманатын атҡарыу ҙа ул.

Тамъян ырыуынан вәкил булып килгән Әбйәлил башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Иштимер Ғүмәров, Табын ырыуы вәкиле һәм ошо ырыуҙың исемен йөрөткән гәзиттең баш мөхәррире Самат Ғәлиуллин (Ғафури районы) һәм башҡа ҡунаҡтарҙың сығыштары ла ошондай рухта булды. Түңгәүер ырыуын йыйында Мәһәҙи (Түңгәүер) ауылы ҡыҙы шағирә Айһылыу Ғарифуллина кәүҙәләндерҙе.

Аҡ кейеҙгә ултыртып, Сыңғыҙҙы хан итеп күтәреүҙә уғата әүҙемлек күрһәтеүе менән тарихта лайыҡлы урын алған Табын ырыуы башлығы

Майҡы бейҙең бөгөнгө варিস্তарының береһе, хәҙер инде үҙе лә шул ырыу аҡһаҡалы булған академик Ғайса Хөсәйенов Бөрйән районы етәкселәренең һәм, ғөмүмән, Бөрйән ырыуының тарихҡа, урындағы рухи хазиналарыбыҙҙы һаҡлауға, ишәйтеүгә етди иғтибар итеүенең бик тә изге эш икәнлеген билдәләне.

— Бөрйәндәрҙең былдай изге эшкә әүәҫ икәнлегенә үҙем шаһитмын. Был төбәктә боронғо яҙма ҡомартҡылар юллап, буйын буйлап, иңен иңләп йөрөп сыҡҡан кеше мин. Бынан теүәл бер йыл элек миңә яҡташыбыҙ Әхмәт Сөләймәнов һәм һеҙҙә шағир булып танылған Хәсән Назаровтар менән Әтек ауылында Алдар батыр хөрмәтенә һәйкәл асыу тантанаһында ҡатнашыу насип булғайны. Әле бына тағы бер тарихи һәм изге эш атҡарҙығыҙ. Элек Бөрйәндә беҙ донъяла тиңе булмаған мәшһүр “Урал батыр” һәм “Аҡбуҙат”, “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Бабсаҡ менән Күсәк” кеүек эпостар, даны киң билдәле Шүлгәнташ иле тип кенә белә инек. Күптәрҙе ул ошо сифаттары менән йәлеп итә ине лә. Ете ырыу береге хөрмәтенә тарихи Атайсал ерендә ошо һынлы мөһабәт һәйкәл ҡуйылғас, был яҡтар менән ҡыҙыҡһыныусылар бермә-бер артасаҡ. Дәүләтселектең нигеҙе булған ырыуҙар союзын ойошторған ата-бабаларыбыҙ рухына хөрмәт йөҙөнән һәйкәл ҡуйыу — дәүләтсә фекерләгән шул быуындарҙың бөгөнгө варিস্তары булған һеҙҙең үҙегеҙгә лә хөрмәт, үҙегеҙгә лә һәйкәл ул.

Марат Муллағоловтың да тантаналы йыйынға йыйылыусыларға әйтер һүҙе күп ине. Шулай булмай һуң, Бөрйәндә тарихи урындарҙы асыҡлап, бөтә эшмәкәрлеге менән тыуған еребеҙ тарихы оло Ватан тарихынан айырылғыһыҙ һәм күптәр көнләшмәле икәнен һүҙ менән генә түгел, һөҙөмтәле ғәмәли эшмәкәрлеге менән дә төшөндөрөүгә бар ғилемен, ижади һәләтен һалған кеше тип beләләр бит уны республика күләмендә лә.

— Бөрйәндә ҡайҙа барма, ҡайҙа баҫма, ҡайҙа баҡма — тарих. Хатта бына беҙ, әле йыйын йыйып, Ете ырыуға һәйкәл асылыу тантанаһын кисереп, баҫып торған ерҙең аҫты ла тарих. Унда әлегә өйрәнелмәгән мәмерйә бар. Ә ул мәмерйәлә тимер эшкәрткәндән ҡала торған ҡалдыҡтар табыла. Тимәк, ете ырыу аҡһаҡалдары йыйын йыйыр урынды осраҡлы рәүештә генә һайламаған бында. Йыйын йыйып, ҡор булып, кәңәш ҡороп ултырғанда, дошман яуы килеп баҫа ҡалһа, был төбәктең урманы, ҡаялары ғына түгел, мәмерйәһе лә ышыҡланыр урын хеҙмәтен үтәгән. Ә инде тимерҙе ни өсөн бында эшкәрткәндәр, тиһәң, туҡтауһыҙ яу артынан яу асып, Аҡ бей батша биргән “жалованная грамота”, йәғни договор шарттарын боҙоуҙарға ҡаршы көрәшкән ата-бабаларыбыҙға тимерлек тотоу тыйылған замандарҙа тимер эшкәртеү, ҡорал ҡойоу, ҡылыс ҡайрау өсөн мәмерйәләр бик тә ярап ҡалған.

Тәжрибәле педагог булараҡ, Марат Муллағолов та бөгөнгө акцияның тәрбиәүи әһәмиәте ни тиклем ҙур булыуын, шуға күрә лә был юлы йыйынға районды̣ң тарих уҡытыусылары ла йәлеп ителеүен иғлан итте.

Йыйында һүҙ гел һоҡланыу белдереүгә, бөгөнгө акцияның тарихи әһәмиәте хаҡында ғына барманы. Тамғалы бағана-стелаға алып килгән юлдарҙы әҙәм йөрөрлөк хәлгә килтереү кәрәклеге хаҡында ла әйтелде. Референдум йә башҡа мөһим сәйәси саралар үткәрелер була ҡалһа, Ете ырыу союзы йыйындарын үткәреү хәжәте тыуыуы ихтимал. Шуға күрә 450 тигән һан менән тамғаланған оло юбилейыбыҙға әҙерлек

дәүерендә шуның бер сараһы рәүешендә Ете ырыу йыйыны үткәрергә лә тәҡдим ителде. Ә был юлдарҙың авторы стела тирәләй ҡырсынташ түшәлгән түңәрәк юл һалып, шуға ете яҡтан ете һуҡмаҡ тоташтырырға, ете ырыуҙың һәр береһен символлаштырған суйын бағаналар тирәләп тәбиғи ташҡа уларҙың һәр береһенең ҡошо, ағасы, тамғаһы, ораны хаҡында мәғлүмәт, стеланың ҡасан, кемдәр тарафынан, Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына бағышлап асылыуы хаҡында айырым таҡтаташ ҡуйыу кәрәк, тигән тәҡдим еткергәйне. Ул саҡта (күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ), өҫтән ҡарағанда, бөтә комплекс ете нуры ете яҡҡа тартылған ҡояш кеүек күренер ине.

Митинг тамам. Йәмил Иҫәнғәлин, Дәүләтбай Рәхмәтуллиндың ҡурайҙарынан ағылған моң оҙатыуында Ирек Зарипов, Кирәймәргән Кәйекбирҙин, Рәмил Иманғоловтар стеланың ҡапҡаһы ауыҙын символлаштырған йәшел таҫманы киҫеүгә, нисәмә быуат моңға, аятҡа сарсап ятҡан тарихи Атайсал уянып киткәндәй булды. Ә йыйындағылар тәүҙә үрә баҫып, тын ҡалып Дәүләтбай Рәхмәтуллин башҡарыуында халыҡ өсөн милли гимн хисабындағы "Урал" йырын тыңланы.

Арал диңгеҙенән Алтайғаса
Йәйелеп ята башҡорттоң далаһы.
Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп,
Әйҙә, йырла, башҡорттоң балаһы!

Ахырҙа мулла, аят уҡып, иманлы эшкә фатихаһын бирҙе. Ошондай изге эштәрҙең ишле булыуын теләне. Йыйындағылар: "Амин! Амин!" — тиештеләр. Эйе, шулай ғына була күрһен!

***Белешмә:*** Ете ырыу союзына ингән ырыуҙарҙың айырмалыҡ билдәләре түбәндәгесә: 1 — ағасы, 2 — ҡошо, 3 — ораны, 4 — "Сыңғыҙнамә" буйынса төп тамғалары, 5 — Р.Кузеев буйынса төп тамғалары.

***Бөрйән*: имән; көсөгән; "Аҡтуған!"; яғалбай ; сүкеш , кәйлә , тире иләү ырғағы .**

***Ҡатай*: артыш; ҡауыд (бәлки, ҡауҙылыр йә һыуһуттыр); "Талаҡ!"; сеперең (һеперең?) ; сүкеш .**

***Ҡыпсаҡ*: ҡарама; бөркөт; "Туксаба!" ("Тукһаба!"); тараҡ ; ҡабырға , ҡапҡа , һәнәк .**

***Тамъян*: тирәк; ҡарсыға; "Тытыя!"; ырғаҡ ; даға , тире иләү ырғағы .**

***Түңгәүер*: ерек; һайыҫҡан; "Табан!"; ярым тараҡ , ай .**

***Үҫәргән*: миләш; торна; "Байғун!"; ҡойошҡан ; әүернә , уҡ .**

***Юрматы*: өйәңке; әтәлге; "Аҡтайлаҡ!"; һәнәк ; һәнәк .**